ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

24-30 декабрь (аҡъюлай) 2016

№52 (730)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Үҙеңдән йәмһеҙерәк һәм үҙеңдән ярлыраҡ кешеләргә ҡара, сәләмәтлеге һиңә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡаҡшағаныраҡтарға иғтибар ит, йәшәгән йорто һинекенән бәләкәйерәк һәм тәпәшерәк булғандарға ла күҙ һал - шул саҡта үҙеңдең ниндәй матур, бай һәм сәләмәт булыуыңды аңларһың. Ә башыңа ниндәйҙер бәхетһеҙлек килгән икән - шуны бел: бөтөн донъяла ҡайғы, ҡурҡыу, борсолоу, сир һәм бәлә кисермәгән бер генә кешене лә таба алмаҫһың.*

*Айдаль Карни.*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мөғжизә көтөү фәлсәфәһе 3

"Киске Өфө"ләге аҡылды аңыбыҙға һеңдерәйек! 8-9

Шаярып, шаяртып йәшәйек! 10-11

Ҡанатлылар һәм әүҙемдәр... маҡсаттарына өлгәшер 12-13

ТВ-программа 14












*Сафуан ӘЛИБАЙ*

## ТАУЫҠ ЙЫЛЫ

***Йылдар менән хушлашабыҙ,***
***Теләп иҫәнлек-һаулыҡ.***
***Ярай, улар килә тора,***
***Быныһы икән - Тауыҡ.***

***Тауыҡ йылына ла беҙҙең***
***Теләк бер - үтһен имен.***
***Йылдар имен үтһен, тиһәң,***
***Табыштар эҙлә - тибен!***

***Һуҡыр тары таптым, тиеп,***
***Тик яр һалма ил-йортҡа.***
***Юҡһа, аҙмы ҡытҡылданыҡ***
***Һалмайынса йомортҡа.***

***Тауыҡ йылы өс йөҙ алтмыш***
***Йомортҡаһын һаласаҡ,***
***Ул сағында ҡытҡылдап та,***
***Ҡорҡолдап та аласаҡ.***

***Өнһөҙ генә түл йыйғанға***
***Әйтмәһендәр: тауыҡ баш.***
***Әтәс булып ҡысҡырмайыҡ,***
***Ғүмер ҡискә ауышҡас.***

***Онотмайыҡ, Тауыҡ йылы -***
***Ҡытлыҡҡа, тигәндәрен,***
***Башҡаларға япһармайыҡ***
***Иңдәргә тейгәндәрен.***

***Был донъяла беҙҙең эштәр -***
***Тауыҡ сүпләһә - бөтмәҫ;***
***Уй-хистәргә ашыр өсөн***
***Был ғүмер генә етмәҫ.***

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БУЛҒАНЫНА ШӨКӨР ИТӘЙЕК!

**Үтеп барған йылдың һуңғы һанында уҡыусыларыбыҙҙы изге эштәргә, ниәттәргә, ғәҙәттәргә саҡырып, әйҙәләп ултырабыҙ бына...**

Бындай әйҙәләүҙәр, өгөт-нәсихәттәр, тәрбиә һабаҡтары йыл әйләнәһенә "Киске Өфө" гәзите биттәрендә аҡҡа ҡара менән теркәлә килә. Уларҙы күңел һалып, аңға һеңдереп уҡырға ғына кәрәк. Шуға ла, "Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" булыр тәүге саҡырыуыбыҙ. Был әйҙәләүгә инандырыр сәбәптәр ошолар: "Мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә" тигән хәҡиҡәтте күҙҙә тотоп, бар өлкәлә - заман ағышында, сәйәсәттә, иҡтисадта, социаль һәм мәҙәни өлкәлә мәғлүмәтлелектә артта ҡалмаҫ өсөн; аҡыл һәм белем туплар, дөрөҫ һөйләшер, дөрөҫ уйлар, уңышҡа өлгәшер, тарихи тамырҙарыңды нығыраҡ белер, бөтөн һорауҙарыңа яуап табыу өсөн уҡырға кәрәк. Һәм тағы бер сәбәп: немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте ғалимдары йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә... бер генә бит булһа ла китап йәки гәзит уҡырға кәрәк, ти. Ғалимдар аңлатыуынса, аҡ ҡағыҙҙан хәрефтәр сүпләү мәлендә организмдағы ике нейрон араһында, йә нейрон менән икенсе бер күҙәнәк араһында бәйләнеш барлыҡҡа килә, бына шул бәйләнеш кешенең хәтере яҡшырыуға, башты эшләтеүгә, хатта йәш көйөнсә һаҡланыуға булышлыҡ итә икән. Кеше китап уҡығанда әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙар өсөн борсола, шатлана, шул ваҡытта мейе әүҙемлеге күтәрелә. Йәғни, аҡ ҡағыҙҙан уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға... Шулай булғас, аҡ ҡағыҙҙан уҡыйыҡ, йәмәғәт!

Әйе, кеше һәр ваҡыт ниндәйҙер мәғлүмәт тулҡынына көйләнеп, үҙгәрештәр көтөп йәшәй. Ваҡиғалар секунд, минут һайын ҡабатланып торған хәҙерге заманда ла беҙ ниндәйҙер ғәҙәти булмаған, быға тиклем күрелмәгән үҙгәрештәр көтөүҙе дауам итәбеҙ. Ә бына булғандары менән ҡәнәғәтләнеү, уларҙы үҙеңдең күңел донъяңдың, булмышыңдың, көнитмешеңдең тәхетенә урынлаштырыу тураһында уйлап та бирмәйбеҙ. Шуға ла бөгөн "Әйҙәгеҙ, булғаны менән ҡәнәғәтләнә беләйек!" тип тә әйҙәләгә килә һеҙҙе, йәмәғәт.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тамамланып килә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә 485 һум 40 тингә генә яҙылып, дуҫлыкты дауам итергә ашығығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе.**



Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан:

Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан Рита Шәйҙуллина, Мәләүез ҡалаһынан Мәрйәм Күсмәева - **"Антология поэзии Башкортостана;**

Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтин, Баҡалы районы Иҫке Ҡатай ауылынан Нуриҙә Ситдиҡова, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Ф. Мәүлетова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры";**

Әбйәлил районы Таштимер ауылынан Йәмилә Сабитова - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр";**

Баймаҡ районы Ярат ауылынан Дилара Йәнбирҙина, Бөрйән районы Һарғай ауылынан Рәмзиә Ғайсина - **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә";**

Баймаҡ районы Аҡморон ауылынан Г. Исламғолова, Ейәнсура районы Трушин ауылынан Фәймә Рафиҡова - **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис";**

Баймаҡ районы Билал ауылынан Рәйлә Әминева, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Айрат Сәғитов, Әбйәлил районы Хәмит ауылынан Г. Хәлфетдинова - **"Бураҡаевтар ижады";**

Әбйәлил районы Красная Башкирия ауылынан Зифа Муллабаева, Хәйбулла районы Сиҙәм ауылынан Рәйсә Йомағолова, Аҡъяр ауылынан Т. Ҡыҙрасова, Баймаҡ районы Билал ауылынан Г. Таңғатарова, Ҡолсора ауылынан Нәғимә Самарбаева, Өфө ҡалаһынан Рәйфә Ғәлиева, Ейәнсура районы Үтәғол ауылынан М. Байбулатов, Иҫәнғол ауылынан Миңлебикә Даутова, Иглин районы Меңьетәр ауылынан Зөлфирә Садиҡова, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылынан Г. Исламова, Белорет районы Мәхмүт ауылынан Р. Ихсанова, Ғафури районы Ерекле ауылынан Гөлирә Ғилманова, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Мәләүез ҡалаһынан Венера Айытколова, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Ф. Низаметдинова - **2017 йылға "Башҡортса дини календарь";**

Сибай ҡалаһынан Х. Һөйөндөҡов, Нурғәле Юнысов, Баймаҡ районы Беренсе Этҡол ауылынан Фәрит Йәғәфәров, Әхмәр ауылынан Р. Айытбаев, Темәс ауылынан Айһылыу Камалетдинова, Билал ауылынан Г. Әлибаева, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәлил Чурин, Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан М. Ғәбделмәнова, Ғафури районы Аҡкүл ауылынан Фәрхәнә Ваһапова, Әбйәлил районы Әхмәт ауылынан А.Фазуллина, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Э. Бикбова, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина, Өфө ҡалаһынан Ф. Аллағолова, Учалы районы Кәйепҡол ауылынан Әнүзә Шакирова, Ҡырмыҫҡалы районы Яңы Бәпес ауылынан Рима Ҡаһарманова **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ булды.

● Декабрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙы шулай уҡ бүләктәр көтә.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БУЛҒАНЫНА ШӨКӨР ИТӘЙЕК!



**(Башы 1-се биттә).**

Ҡыҫыр хыялдарҙың тормошҡа ашҡанын көтөп ултырырға түгел, йәшәргә кәрәк! Хоҙайҙың тап һинә биргәндәрен, тәғәйенләгәндәрен, бүләк иткәндәрен тойорға, уларҙы ҡәҙерләргә өйрәнергә кәрәк! Ә бит беҙгә, башҡортҡа, күпте биргән Хоҙай. Иң ҡиммәтле хазинабыҙ - тел биргән. Тәбиғәттең иң ҡөҙрәтле көскә эйә ижад емеше - моңдарыбыҙ бар. Иҫ киткес хозур төбәктә яралтып, йәнебеҙҙе ошо ергә еректергән. Милләтем кешеләренең матур, һөйкөмлө йөҙө, һынсыл буй-һыны, сағыу таланты, аҡыл һәм аң камиллығы тураһында әйтеп тораһы ла түгел! Ауыҙ тултырып үҙ туған телебеҙҙә һөйләшеп, үҙ йырҙарыбыҙҙы йырлап, үҙ бейеүҙәребеҙҙе бейеп, үҙ йолаларыбыҙҙы атҡарып, үҙ ризыҡтарыбыҙ менән туҡланып, үҙебеҙҙең асылыбыҙҙа үҙебеҙ булып йәшәргә, рухи байлығыбыҙҙы түкмәй-сәсмәй киләһе быуындарға ла тапшырыуҙы хәстәрләргә әйҙәләйем шуға ла һеҙҙе, милләттәштәрем.

Булғаны менән ҡәнәғәтләнә беләйек, тиеүем һеҙҙе ойорға, ҡул ҡаушырырға саҡырыу түгел. Башты ташҡа ярып ҡына бер ни үҙгәртә алмаған заманда йәшәйбеҙ икәнен дә онотмайыҡ. Яҙмыш дилбегәһен үҙ ҡулыбыҙға алыуҙы, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләргә тейешлегебеҙҙе лә аңлата булыр әлеге әйҙәләү. Хәйер, түбәндәге риүәйәт аша ныҡыраҡ аңлашылыр әйтергә теләгәнем: "Мин төш күрҙем. Күккә ашҡанмын икән, тим. Янымда бер Фәрештә пәйҙә булды. Ул мине Күк донъяһында оҙатып йөрөргә, унда булғандар менән таныштырырға тейеш икән. Йәнәш атлап киттек. Бына бер ҙур залға барып индек. Унда шул тиклем күп фәрештәләр йыйылған. Фәрештә аңлата башланы: "Бына бында кешеләрҙең доғалар мәлендә Хоҙайға ялбарыуҙары һәм үтенестәре йыйылған. Бындағы фәрештәләр ҡағыҙ биттәренә яҙылған шул үтенестәрҙе сортларға айыра". Артабан оҙон коридор буйлап киттек. Тағы бер залға барып индек. Бында ла фәрештәләр бик күп, баш баҫып ниҙер эшләйҙәр. Фәрештә, аңлатып: "Бында үҙенә мөрәжәғәт итеп ялбарған кешеләргә Хоҙайҙың фатихаһы яҙылған телеграммалар тупланған, фәрештәләр уларҙы адресаттар буйынса тарата..." - тине. Тағы ла бер оҙон коридор буйынса барып, бәләкәй генә бүлмәгә индек. Унда бер генә фәрештә эшһеҙлектән моңайып ултыра. "Быныһы рәхмәттәр бүлеге, - тип аңлата Фәрештә, бер аҙ уңайһыҙланып. - Нисек кенә күңелһеҙ булмаһын, был факт: кешеләр Хоҙайҙан фатиха алыуын ала, ләкин бының өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтергә онота..."

- Улайһа, фатиха алғандан һуң Хоҙайға нисек рәхмәтеңде еткерергә һуң? - тип һорайым Фәрештәнән.

- Был бик ябай эшләнә: "Рәхмәт һинә, Хоҙайым", тип кенә әйтергә кәрәк...

- Ә кеше Хоҙай фатихаһында йәшәгәнен нисек белергә тейеш? - тип һорайым тағы ла.

- Әгәр ҙә һинең һыуыткысыңда - аҙыҡ, өҫтөңдә кейем, баш осоңда ҡыйығың бар икән - тимәк, һин Ер йөҙөндә йәшәүсе 75 процент халыҡтан байыраҡһың һәм һин Хоҙай фатихаһындаһың...

- Әгәр ҙә һин иртән йоҡонан торғанда үҙеңде һау- сәләмәт кеше итеп тояһың, үҙ аяҡтарыңда атлап, күҙҙәрең менән яҡты донъяға баҡаһың икән - тимәк, һин аяҡһыҙ-күҙһеҙҙәрҙән, бөгөнгә ҡәҙәре йәшәмәгәндәрҙән бәхетлерәкһең.

- Әгәр ҙә һин бер ваҡытта ла яу ҡурҡынысы, төрмә ҡараңғылығы, аслыҡ ғазаптары татымағанһың икән - тимәк, һин Ер йөҙөндәге 700 миллион кешенән бәхетлерәкһең һәм Хоҙай хозурындаһың.

- Әгәр ҙә һин киң йылмайып, башыңды күтәреп йөрөй һәм әйләнә-тирәләге кешеләргә үҙеңдең һөйөүеңде еткерә алаһың икән, тимәк, һин гел икеләнеп һәм бер сиктән икенсеһенә һуғылып, донъянан йәм тапмай йәшәгән кешеләрҙән юғарыраҡ тораһың - был да Хоҙай фатихаһы...

Шуға ла, үҙеңдә булған ошо байлыҡтар өсөн Хоҙайға, атай-әсәйеңә рәхмәт уҡырға, ә был төшөңдә башҡаларға һөйләргә онотма...

Һәм бына мин шул ғәжәп төшөм хаҡында һеҙгә һөйләп ултырам..."

Эйе, риүәйәттәр беҙҙең инаныуҙарға ныҡлыҡ өҫтәй, икеләнеүҙәрҙе юя икәнен беләбеҙ. Аҡ ҡағыҙ битенән уҡылған ошондай фәһемле һүҙҙәр менән күңел һауыттарығыҙҙы тултырып, матур йәшәү өлгөләренә, һыналған тәжрибәләргә әйәреп, тормоштоң ваҡ-төйәктәренә иғтибар итмәйенсә, алға, маҡсатыңа табан ынтылып, юғарыға ҡарап фекер итеп, булғанына шөкөр итеп йәшәйек. Шул саҡта заман һынауҙарын... отасаҡбыҙ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советы президенты Филипп Боссан, вице-президенты Алехандро Гонсалес, советтың Рәсәйҙәге президенты Тамара Пуртова менән осрашты. Осрашыу барышында 2020 йылда Башҡортостанда Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреүгә әҙерлек мәсьәләләре тикшерелде.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһының яңы составы раҫланды. Положениеға ярашлы, палата өс йылға 35 кеше иҫәбендә төҙөлдө. 10 кеше - республика Башлығы, тағы унауһын Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Президиумы тәҡдим итте. 15 ағза конкурс нигеҙендә һайланды.

✓Республика Башлығы "Рәсәйҙең 500 иң яҡшы терапевы" исемлегенә ингән участка табиптары менән осрашты. Тәбрикләгәндән һуң, Рөстәм Зәки улы республикала төҙөләсәк медицина учреждениеларын барланы. Билдәләнеүенсә, Өфөлә Республика кардиология үҙәгенең һәм Республика онкология диспансерының яңы корпустары, Учалыла хирургия корпусы, Дүртөйлө, Туймазыла поликлиникалар бинаһы төҙөләсәк, Салауат ҡалаһы дауаханаһын төҙөү тамамланасаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте төрлө конкурстарҙа, бәйгеләрҙә еңеү яулаған педагогтарҙы Башҡортостан Башлығы премияһы менән бүләкләү тураһында бойороҡ сығарҙы. Был матди бүләктә 87 педагог алаcаҡ. Һигеҙ премия - 60-ар мең, 79 премия 30-ар мең һумлыҡ.

✓Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры коллективы йәнә "Салауат Юлаев" операһын сәхнәләштерҙе. Яңы ҡуйылышта тәҡдим ителгән әҫәр күренекле башҡорт композиторы Заһир Исмәғилевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнала. Премьераны "Салауат Юлаев" хоккей командаһы ла тамаша ҡылды. Баш тренер Игорь Захаркин: "Салауат Юлаев символында ысын мәғәнәһендә ғорурлыҡ, ҡаһарманлыҡ өлгөһө ярылып ята. Ошо образды боҙ майҙанында ла һынландырырға тырышыуыбыҙ шулай уҡ батырлыҡҡа тиң, тип әйтер инем..." тине.

✓ *Бәхетле булырға, донъя йәмен тойоп йәшәргә теләйһең икән - оло бәхет көтөп ултырма, уны бәләкәй генә шатлыҡтарҙан йый. Һауыҡтыр күңелеңде, ҡаралыҡтан арала, таҙала. Мәсәлән, иртәнсәктән ыңғайға көйләнеп тор.*



*ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘЕБЕҘҘӘН БАШЛАЙЫҠ!*

**Яңы йыл төнө һәр кемдең күңеле яҡты өмөттәр менән тулышҡандан-тулышып, мөлдөрәмә булған мәл. Балаларҙы күҙ уңында тотмайым мин. Улар былай ҙа мөғжизә илендә йәшәй был көндәрҙә: шыршы байрамдары, Ҡыш бабай бүләктәре, сюрпризлар. Танауҙарына еҫ кергәндәре лә әкиәти тойғоларҙы кисерә әле, байрам алды эйфорияһында йөрөй. Ололар ҙа Яңы йылдан нимәлер көтә бит. Тик күптәр быны башҡаларға белдермәй. Уйлап ҡараһаң, бер ниндәй ҙә мөғжизә булмаҫын беләһең, был шул уҡ үтеп китә торған төндәрҙең береһе, әммә... күңел тулышҡан һәм ул йырылыу юлын эҙләй. Ахырҙа, тап ана шул мөғжизә көтөү мәле иң мөһим торош булып сыға ла инде.**



# МӨҒЖИЗӘ КӨТӨҮ ФӘЛСӘФӘҺЕ

Был төнгә һәр кемдең үҙ хыялы. Кемдер иртәгәнән башлап яңыса йәшәй башлайым, тип уйлай. Икенселәр - бәхетен табыуға, өсөнсөләр - байыуға, дүртенселәр һауығыуға өмөтләнә. Һәм шул теләктәренең тормошҡа ашыуын көтә башлай. Башта көн дә көтә, бына-бына булыр, шулай килеп сығыр, тип һағалай. Әммә көндәрҙе көндәр, айҙарҙы айҙар ҡыуып ваҡыт үтә, ә хыялдар ҡабул булмай. Был мөғжизә көтөү процесы бер нисә айҙарға һуҙылып, кешенең эсендәге бар ғына ыңғай энергияһын һурып сығарып бөтөргә лә мөмкин. Сөнки был үҙенә күрә донъяға хәтерен ҡалыу, эске үпкәләү ул. Был ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо яйлап-яйлап үҫеп, ҡатып, ҙур бер асыуға әүерелә. Эсендә бындай асыу йәшәгән кеше эргә-тирәһендәгеләр менән дә килешә алмай. Юҡҡа-барға мыжый, бәйләнә, унын өсөн бөтә нәмә лә насар, алда яҡтылыҡ юҡ һәм булмаясаҡ та. Әлбиттә, ул бөтөн был негатив уйҙарҙың үҙ эсенән килеүен аңламай, киреһенсә, тышҡы яҡ уны шулай ҡыйырһыта, ауырыта, иҙеп тотона, уға яратҡан эше, шөғөлө менән булышырға бирмәй, кемдәрҙер уны яратмай, күрә алмай, көнләшә, тормошон ағыулай тип әсенә.

Ысынында, мөғжизә ул һинең үҙеңдә. Унын инеше - һин үҙең. Бары тик мөғжизә көтә башларҙан алда, хыялдар теҙмәһенә бер нәмәне генә өҫтәргә кәрәк: "Алла бирһә, мин үҙем..." тигәндә. Һәм мотлаҡ "үҙегеҙ" икәндә онотмаҫҡа. Мәсәлән, сәләмәт булыуҙы көтәһең икән - спорт менән шөғөллән, эсмә, тартма, дөрөҫ туклан һ.б. Өс-дүрт айҙа һин был мөғжизәнең ысынлап барлығын тояҫаҡһың.

Бәхетле булырға, донъя йәмен тойоп йәшәргә теләйһең икән - оло бәхет көтөп ултырма, уны бәләкәй генә шатлыҡтарҙан йый. Һауыҡтыр күңелеңде, ҡаралыҡтан арала, таҙала. Мәсәлән, иртәнсәктән ыңғайға көйләнеп тор (унын өсөн кистән яҡшы уйҙар уйлап, сүрәләр уҡып, матур теләктәр теләп ят). Иртә тор, түшәктә йыбанып ятыу, артыҡ йоҡлау кешене көндән-көн батыра. Яҡауландыра, унын уйҙарын да ойота ғына бара. Уянғас та шундуҡ ҡалҡын, ғаилә ағзаларына йәки эргәндәгеләргә йылмайып өндәш, көнөңдө матур үҙкәрергә теләгәнеңде онотма. Күршең яман ҡараһа ла, коллегаң тупаҫыраҡ өндәшһә лә - хәтереңдә тот: улар һинең эсеңдә түгел, тимәк, һинең донъяға ҡарашыңда бөтөнләй ҡатнашмайҙар. Улар һинең янындағы есемдәр генә. Улар һин нисек ҡабул итәһең, шулай булалар. Ошо торошто бер өс-дүрт көн ҡабатлағанда, башҡаларҙың үҙеңә ҡарата асылыуын тояҫаҡһың һәм күп нәмәләр икенсе төрлө мәғәнә аласаҡ. Тимәк, һин үҙеңә мөнәсәбәтте үҙең яһайһың.

Бәләкәй нәмәләргә лә шатлана бел, тинек. Быға мин һатып алған сәйеңдең тәмле булыуын да, ябалаҡлап ҡар яуыуын күҙәтеүҙе лә, яҡын кешең менән телефондан һөйләшеп алыуҙы ла, балаңдың яҡшы билдәләрен дә, йөрәккә ятышлы көй тыңлап алыуҙы ла индерәм. Һәр нәмәнең позитивын ғына алып өйрәнеү, гел яҡшыға һаплау ыңғай энергияны булдыра һәм, әлбиттә, ул энергияны башҡалар ҙа тоя. Улар ҙа уны ҡабул итә һәм һинең янындағы аура үҙе бер йылы мөхиткә әүерелә. Ошо торош бәхет була ла инде.

Байыуы йәки үҙеңде бай итеп тойоу мәсьәләһендә лә иң беренсе сиратта күңел байлығы тора. Скептиктар был тәңгәлдә ниндәй генә дәлилдәр килтерһә лә, беҙ күңеле ярлы булған, йөрәгендә ижадҡа урын табылмағандың үҙен эш аты итеп кенә тотоуын һәм һығылып йығылғансы ғына саба икәнен беләбеҙ. Кеше ярты ғүмерен баш өҫтөндә ҡыйыҡ булдырыуға, яҡшы машина һатып алыуға, ашау һәм кейенеүгә арнай. Тәне өсөн хеҙмәт итә, йән төшөнсәһен онота. Шул хеҙмәт юлында алдай, урлай, намыҫһыҙ эштәр башҡара, дан артынан ҡыуа, үҙенә файҙа килтерер генәне уйлап йәшәй. Ә йән ул шундай нәмә - ул донъя байлығына мохтаж түгел, ул унын менән туйынмай. Шунлыҡтан, бөтөн был "ауырлыҡты" ла бары ваҡытлыса ғына күтәрә ала. Мәле етһә, ул быларҙы һелкеп кенә ташлай. Һәм шул мәлдә кеше ғүмер буйы йыйғанының төмен тоймай башлай. Уйлап ҡараһаң, хатта көлкө лә кеүек, күҙ алдығыҙҙағы тәҙрә аша күренгән ошо ерҙәр өсөн дә ниндәй генә халыҡтар һуғышмаған, яуҙар үтмәгән, уларҙы ниндәй генә хаҡтарға һатып алып, талап алып, бөгөн дә кәртәләп бикләп ултырмайҙар. Шул ер хужаларының береһе лә бөгөн юҡ, улар туҙанға әйләнгән, тағы ла илле йылдан былары ла булмаҫ, икенселәре килер. Ә әлеге ер тик ятыр. Тағы ла әллә күпме шундай "хужаларҙы" күрер әле. Ошоларҙы уйлаһаң - оят. Шул ғына фәлсәфәне аңламағанға.

Бер нәмәне лә ярһып яратма, ярһып табынма, ярһып талап итмә, бар нәмәлә сама бел, тип өйрәтә аҡыллы китаптар. Һәм дөрөҫ өйрәтә лә. Баланды үтә яратыу ҙа, халҡынды иң шәбе тип иҫәпләү ҙә, үҙеңде иң аҡыллыһы тип уйлау ҙа бары төңөләүгә алып килер хата уйҙар ғына ул. Шундай уҡ уйлы, шундай уҡ сифатлы, хатта күпкә шәберәктәрҙең янында барлығын һәм улар ҙа Хоҙай тарафынан яратылып, һинең менән бер хоҡуҡта йәшәргә теләгәндәрен онотма. Идиллияның нигеҙе ошонда ла.

Шулай итеп, Яңы йыл төнөнән мөғжизә көткән мәлдә, шул мөғжизә тормошҡа ашһын, йәшәйешебеҙҙә нимәләрҙер үҙгәрһен, хәйерле яңылыҡтар килһен өсөн беренсе аҙымды үҙебеҙҙән башлайыҡ. Бөгөндән. Хәҙерҙән.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ӨФӨБӨҘҘӨ ЯРАТАЙЫҠ!

**Кемгә нисектер, әммә "Киске Өфө" гәзитенең йыл аҙағында була торған ошондай әйҙәләүҙәре минең күңелгә бик ятышлы. Уятып, сәмләндереп, изге ғәмәлдәргә дәртләндереп ебәрә бит ул. Һәм тағы ла уйландыра. Бына әле "Әйҙәгеҙ, Өфөбөҙҙө яратайыҡ!" тигән саҡырыуға бер нисә фекер әйтеүҙе һорағас, ысынлап та, уйға ҡалдым. Сөнки: "Эйе, беҙ бик яратабыҙ Өфөбөҙҙө,"- тип әйтеү генә бер нәмә лә әйтеү түгел шул әле. Ҡайһы берәүҙәрҙең хатта улай тип әйтергә лә хоҡуғы юҡ, тип уйлайым. Ни өсөн икәнен хәҙер аңларһығыҙ.**

Мин Һупайлы бисtәһенең Ҡариҙел яры буйында урынлашҡан урамында йәшәйем. Йәйге иртәләрҙә һәм кистәрен бында һауа һулап туйғыһыҙ, хас та ауылдағыса: һалҡынса, дымлы, ҡаймаҡ кеүек тәмле. Кистәрен дамба буйына ғаилә, күрше-күлән әхирәттәр менән һауа һуларға сығыу - йәнгә рәхәт бер ял. Һуңғы йылдарҙа дамба юлын тигеҙләп, асфальт түшәп, йәйәүлеләр өсөн тротуар һалып, юл ситтәрен, ҡайҙандыр килтереп, бик матур селтәр-биҙәкле рәшәткәләр менән кәртәләп ҡуя башлағайнылар. Бер көн сыҡһаҡ, "ах!" иттек: тош-тош урындан сәнғәт әҫәренә тиң ана шул тимер рәшәткәләрҙе... ҡырҡып алып киткәндәр! Иларҙай булдыҡ. Был ниндәй ҡырағайлыҡ? Өфө ҡала мэры Ирек Ялалов үҙенең һуңғы ваҡыттағы сығыштарында баш ҡалабыҙҙың парк һәм скверҙарында ҡылынған ошондай яһиллыҡ - вандализм факттары хаҡында гел әйтә килә, халыҡты иҫкәртә лә бит, тик аңламаған әҙәмдәргә был ғына етмәй, күрәһең. Тимәк, ҡала буйлап ныҡ таралып өлгөргән был "сир". Хәҙер нәмә - бөтә урындарға ла видеокамера ҡуйып сығырғамы ни инде? Был бит мөмкин дә түгел. Йәшәгән урыныбыҙ бит һәр кем яратырға, ҡәҙерләргә, матур һәм уңайлыраҡ итергә тырышырға тейеш. Исмаһам, булғаныбыҙ юҡ итмәҫкә ине - ошонда йәшәйбеҙ бит! Әгәр ана шундай вандализм осрағы өҫтөндә берәйһе тотола ҡалһа, ул әҙәмде түшенә "бур" тип яҙып, ҡала буйлап ғибрәт итеп йөрөтөп сығырға кәрәк, башҡаларына һабаҡ булыр ине.

Мине борсоған тағы бер мәсьәлә - ул Өфөбөҙҙөң милли йөҙө булмауы, ҡәҙимге мендәрҙең береһе - бер иштән төҙөлгән индустриаль ҡалаға әүерелә барыуы. Баш ҡалабыҙ йөҙөнә милли колорит биреү хаҡында "Киске Өфө" йыш яҙа. Шул турала Өфө ҡала Советы депутаттары алдында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов та әйткән, тип яҙып сыҡты гәзит. Ләкин төҙөүселәр был тәҡдимгә бик ҡолаҡ һалып бармай, ахыры. Төҙөләш, тигәндән, ҡалабыҙҙы, ысынлап та, инженерлыҡ геологияны тикшереүҙәре үткәреп тормаҫтан, йорт араларына килтереп берәй күп ҡатлы "бағана-йорт" тар һалыуҙан да һаҡларға кәрәк, сөнки Өфө әленән-әле ер убылып, машиналарҙы "йота" башлауы бер бөгөн түгел. Дөрөҫөн әйткәндә, баш ҡалабыҙ карст бушлыҡтары өҫтөндә ултыра, ти геологтар. Аҡса артынан ҡыуып, Өфө биләмәһендә күп ҡатлы торлаҡ йорттар төҙөүҙе ҡәтғи тыйырға кәрәк.

Һаҡлайыҡ, ҡәҙерләйек, яратайыҡ Өфөбөҙҙө - беҙгә һәм балаларыбыҙға йәшәргә бит бында.

**Лилиә ХАФИЗОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә "Башнефть" асыҡ акционерҙар йәмғиәте акционерҙарының сираттан тыш дөйөм йыйылышында компанияның Директорҙар советы һайланды. Уға ун кеше инде. Күпселек тауыш менән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов, вице-премьер - республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев, "Башнефть" президенты Андрей Шишкин, шулай уҡ "Роснефть" вәкилдәре Дидье Касимиро, Отабек Кәримов, Артем Пригода, Кристоф Нерин, Павел Федоров, Олег Феоктистов һәм Елена Завалеева һайланды.

✓Superjob.ru порталы Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың костюмын кейгән актерҙар һәм аниматорҙарҙың уртаса хеҙмәт хаҡы кимәлен баҫып сығарҙы. Яңы йылдың төп персонаждарының эш хаҡы рейтингына илдең бер нисә ҙур ҡалаһы, шул иҫәптән Өфө индерелгән. Өфөлә Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың бер сәғәтлек эше һәр береһенә 500 һумдан 1100 һумға тиклем тирбәлә. Хаҡтар 40-45 минутлыҡ эш өсөн күрһәтелгән. 29-31 декабрҙә Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы өйгә саҡырыу ҡиммәткәрәк төшә.

✓Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаттары ихаталарҙағы ташландыҡ автомобилдәрҙе эвакуациялау тураһында положение әҙерләй. Халыҡ һайланыусылары әйтеүенсә, ихаталарҙа хужаһыҙ йәки ҡарауһыҙ торған автомобилдәр урындағы халыҡҡа ғына түгел, коммуналь хеҙмәттәргә һәм махсус техникаға ла ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Положение йылдар буйы ихаталарҙа ултырған транспорт сараларын махсус туҡталҡаға алып китеүҙе күҙ уңында тота.

✓Өфөлә сираттағы вакансиялар йәрминкәһе ойошторолдо. Унда бөтә төр иҡтисади эшмәкәрлек һәм милек формаһындағы предприятиелар ҡатнашты. Йәрминкәлә администратор, бетон ҡойоусы, водитель, инженер, кондуктор, кондитер, түбә ябыусы, ташсы, контролер, менеджер, уҡытыусы, балта оҫтаһы, һатыусы, слесарь, мебель йыйыусы, слесарь-сантехник, тракторсы, токарь, электрик һәм башҡа һөнәрҙәр тәҡдим ителде.

✓Башҡортостан кадеттары билбау көрәше буйынса Бөтә Рәсәй турнирында 15 миҙал яуланы. Түбәнге Камала Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры Шамил Саҙрыев иҫтәлегенә арналған турнирға республиканан 34 йәш көрәшсе ҡатнашты. Команда турнирҙа ете алтын, биш көмөш һәм өс бронза миҙал яуланы.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Шулай ҙа быйылғы ҡаҙаныштарҙың иң ҙуры - ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың Өфөнө төҙөкләндереү буйынса Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары алдында сығыш яһауы булғандыр.*

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҠАҘНА АҠСАЛЫ БУЛМАҠСЫ



**Йола буйынса йыл һуңында Өфө ҡала округы Советы депутаттары 2017 йылға һәм 2018-2019 йылдарға ҡала бюджетын раҫланы. Яңы йылдан был төп финанс документының килеме һәм сығымы 19,39 миллиард һум булыуы күҙаллана. Күп йылдар дауамында бындай дефицитһыҙ бюджет ҡабул ителгәне юҡ ине әле.**

- Был иҡтисади хәл-тороштоң яҡшырыуын аңлата, тигән һығымта яһарға ярамай, һәр хәлдә, был - тотороҡлоҡ күрһәткесе, - тине депутаттар корпусының ҡарары хаҡында ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов. - Ҡытлыҡһыҙ бюджетты инновацион ҡараш һөҙөмтәһендә ҡабул итеү мөмкин булды. Беҙ ҡала милкен тағы ла һөҙөмтәлерәк файҙаланыуҙың өҫтәмә ресурстарын таптыҡ. Тәү сиратта, ул - торлаҡ булмаған күсемһеҙ милек. Шулай уҡ беҙ киләсәктә муниципалитеттың артабанғы төҙөлөш өсөн план һәм межалау проекттарын үҙ аллы эшләүе һөҙөмтәһендә өҫтәмә аҡса алыу мөмкинлеген дә өйрәнәбеҙ. Бюджетты тулыландырыуҙың яңы сығанаҡтарын эҙләү - ул ҡала хакимиәте менән ҡала Советының берлектәге эшмәкәрлеге.

2017 йылда бюджеттың һиҙелерлек өлөшөн физик шәхестәрҙең (граждандарҙың) килеменә һалым алып торасаҡ - 4,11 миллиард һум. Дөйөм килемгә һалым ҡаҙнаға 1,17 миллиард һум килтерәсәк. 1,13 миллиард һум матди һәм күсемһеҙ милекте һатыуҙан тупланасаҡ. Дәүләт һәм муниципаль милекте файҙаланыу бюджетты 2 миллиард һумға тулыландырырға тейеш һ.б.

Бюджет, башҡа йылдарҙағы кеүек үк, социаль йүнәлешле буласаҡ. Йәғни уның төп өлөшө мәғарифҡа (9,12 млрд һум), торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа (3,96 млрд һум), милли иҡтисадҡа (1,98 млрд һум), дөйөм дәүләт мәсьәләләренә (бер миллиард һумдан ашыу), милли именлек һәм хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлегенә (778 млн һум), социаль сәйәсәткә (525 млн һум), физкультура һәм спортҡа (516 млн һум) бүленә.

Бюджет ҡабул ителгәнгә тиклем ҡалала асыҡ тыңлауҙар үткәрелә. Унда яңғыраған тәҡдимдәрҙең һәр береһе ентекле тикшерелеп, һөҙөмтәлә өҫтәмә рәүештә бюджетҡа тағы ла 30,9 миллион һум индерелә. Уның 15 миллион һумы Кустарево, Романовка, Ольховая урамдарына үҙәкләштерелгән һыу торбаһы үткәреүгә, ике миллионы - "Трамплин" туҡталышындағы канат юлын ремонтлауға, 5,1 миллионы - Өфө-Охлебинино автоюлындағы яҡтылыҡ селтәрен төҙөп бөтөүгә, 4,3 миллионы - Нуғай ауылында Луговая, Заречная һәм Ғ. Таған урамдарына ут үткәреүгә, 1,5 миллионы - ошо ауылдың тротуарҙарын, 3 миллионы Луговая урамын төҙөкләндереүгә йүнәлтеләсәк.

Шулай уҡ асыҡ тыңлауҙарҙа яңғыраған башҡа тәҡдимдәр бюджетты өҫтәмә тулыландырыу сығанаҡтары табылған осраҡта финансланасаҡ. 44-се мәктәпкә ярҙамсы бина төҙөү, Г. Мушников урамын артабан һалыу, 116-сы мәктәпте капиталь ремонтлау буйынса тәҡдимдәр 2018 йыл бюджетына индереләсәк, йәиһә республика адреслы инвестиция программаһына тәҡдим ителәсәк.

Башҡа йылдар тәжрибәһе күрһәтеүенсә, бюджет - ул тере организм кеүек, ваҡыт үткән һайын үҫеүе лә ихтимал. Шуға күрә йыл дауамында ҡаланың төп финанс документына бер нисә тапҡыр үҙгәрештәр индереләсәк, уның килем өлөшө артҡан һайын сығым өлөшө лә үҙгәртеләсәк.

*БАШ ҠАЛАМ...*



**Өфөнөң йыл дауамында теге йәки был конкурста еңеү яулауы, ниндәйҙер проект буйынса илдә тәүгеләр исемлегендә булыуы тураһында йыш ишетәбеҙ. Уларҙың барыһына ла туҡталып тормайынса, бер нисәһен атап үтеү ҙә етә.**

# АЛДА БАРА, АЛДА БАРАСАҠ!

Мәҫәлән, халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар араһында ла ул лидерҙар рәтендә. Төп капиталға инвестициялар йәлеп итеү йылдың ун айында былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 8,8 процентҡа күберәк булған. Бөтөн донъя көрсөккә зарланғанда, бындай күләм, әлбиттә, насар түгел. Ҡаланың инвесторҙары булып "Башнефть" АНК-һы, "Башнефть - Добыча", "Башкирэнерго" һ.б. эре предприятиелар тора. Ә инде тормошҡа ашырылған проекттарҙы халыҡ үҙе лә күрҙе һәм баһаланы. Улар: яңы Затон күпере, күп функциялы "Йәй" комплексы, "Уфимкабель"дең яңы корпустары, Республика перинаталь үҙәге.

Инвестпроекттар иҫәбендә Башҡортостандың 100 йыллығы уңайынан төҙөләсәк юбилей объекттары ла бар. Был исемлеккә 7 мәктәп, 3 балалар баҡсаһы, 300 ихатаны төҙөкләндереү, Ағиҙел йылғаһы ярының икенсе сиратын төҙөү, 9 спорт объектын реконструкциялау, Фән йорто, шулай уҡ планетарий һәм Урмансылар паркында зоопарк төҙөү тора.

Күптән түгел генә тамамланған "Балалар ҡалаһы - ғаиләләр ҡалаһы" Рәсәй ҡалалары араһындағы конкурста ла баш ҡалабыҙ беренсе урын яуланы. Ул етенсе йыл рәттән уҙғарылған был бәйгелә бишенсе тапҡыр ҡатнаша һәм призһыҙ ҡалғаны юҡ. Ҡатнашыусы ҡалалар ауыр тормош хәл-торошонда булған балаларға социаль мөхит, именлек булдырыу, ошо йүнәлештә профилактика эштәре алып барыу саралары планы менән бер рәттән, конкурс шарттары талап иткән башҡа эшмәкәрлекте лә тормошҡа ашыра. Маҡсатлы эшләү һөҙөмтәләр ҙә бирә, уңыш та килтерә.

Шулай ҙа быйылғы ҡаҙаныштарҙың иң ҙуры - ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың Өфөнө төҙөкләндереү буйынса Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары алдында сығыш яһауы булғандыр. Мәскәүҙә уҙғарылған парламент тыңлауҙарында ошо йүнәлештә ҙур эшмәкәрлек алып барған субъекттарҙың административ үҙәктәренең иң яҡшы тәжрибәләре генә тыңланыла икәнен иҫәпкә алғанда, был ваҡиға ла бик әһәмиәтле. Парламентарийҙарҙың Башҡортостан тәжрибәһенә иғтибар күрһәтеүе юҡҡа түгел, сөнки 2012 йылдан алып Өфөлә ҡала территорияһын төҙөкләндереүгә айырым иғтибар бирелә. Муниципалитеттың ҡыҫҡа һәм оҙайлы перспектива программалары һәм проекттары өфөләрҙең йәшәү, эшләү һәм ял итеү именлеген һәм уңайлылығын күтәреүгә йүнәлтелгән.

Ирек Ялалов үҙенең сығышында билдәләүенсә, Өфө территорияһын төҙөкләндереү "Парктағы ҡала" концепцияһына нигеҙләнеп алып барыла. Ул баш ҡаланың һәр районында йәйәүлеләр аллеялары, архитектура формалары, фонтандары, уйын майҙандары, дөйөм туҡланыу урындары булған территориялар булдырыу. Киләсәктә ҡаланы шундай майҙандар менән төҙөкләндереү һәм уларҙы бер-береһе менән йәйәүлеләр һәм велосипедсылар юлдары менән тоташтырыу күҙаллана. Шулай уҡ йорттарға яҡын булған спорт майҙансыҡтары булдырыу, парк һәм урмандар эсендә йәйәүле трассалары һалыу ҙа планлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Бынан тыш, йорт алдары төҙөкләндерелә, ихаталарҙан тимер гараждар алына һәм башҡа файҙалы эштәр башҡарыла. Өфөлә эшләнгән эштәр федераль кимәлдә лә танырла һәм баш ҡала Рәсәй Федерацияһының беренсе категорияға ҡараған ҡалалары араһында иң төҙөк биләмә конкурсында икенсе урын менән баһаланды. РФ Дәүләт Думаһы Рәйесе Сергей Неверов билдәләүенсә, бындай проекттарҙы дөйөмләштереп, артабан файҙаланыу зарур.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҠЫШ БАБАЙҒА ЫШАНАЙЫҠ!



**Йыл дауамында яҡшы өлгәшкән, тәртипле, тиҫтерҙәренә өлгө күрһәткән балалар 22 декабрь көндө Өфөгә "Башҡортостан" дәүләт концерт залына республика Башлығының Яңы йыл кисәһенә йыйылды. Быйыл Ҡыш бабай төрлө район һәм ҡалаларҙан килгән 780 баланы бүләктәре менән ҡыуандырҙы.**

Яңы йыл байрамына уҡыу алдынғылары, төрлө предметтар буйынса олимпиада еңеүселәре, художестволы үҙешмәкәр фестивалдәре лауреаттары, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең балалары, әҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләләрҙән булған бәләкәстәр саҡырылғайны. Улар Ҡыш бабай, Ҡарһылыу һәм әкиәт геройҙары менән шыршы тирәләй әйлән-бәйлән уйнап, һәләттәрен күрһәтеп алды, иҫтәлеккә фотоға төштө. "Тылсымлы кинокамера сере" тип аталған театрлаштырылған тамашанан һуң балаларҙы Башҡортостан Башлығы исеменән Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов ҡотланы.

- Ҡәҙерле балалар, һеҙ алға табан бер ҙур аҙым яһанығыҙ инде, йыл дауамында уҡырға һәм төрлө өлкәлә һәләттәрегеҙҙе үҫтерергә тырыштығыҙ. Оҙаҡламай ошо залда һеҙҙе билдәле ғалимдар, сәйәсмәндәр, мәҙәниәт һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәре, артист булараҡ тәбрикләрбеҙ, тип ышанам. Мөғжизәләргә һәм хыялдар тормошҡа ашыуына ышанысығыҙҙы юғалтмағыҙ, бының өсөн бик тырыш булырға кәрәклеген аңлағыҙ. Етеп килгән Яңы йыл менән!" - тине Салауат Тәлғәт улы.

Әкиәти байрам кисәһендә балалар йомшаҡ уйынсыҡтар, тәмлекәстәр, "Китап" нәшриәтенән С.Т. Аксаков-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Ноябрҙә Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 4175 һум, йәки эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 44,6 процент тәшкил итте. Былтыр ноябрь айында төбәктә пособиеның уртаса күләме 4185 һум булған. Йыл башынан 45 меңдән ашыу кеше эшһеҙ статусын алған. Был 2015 йылдың ғинуар-ноябрь айҙарына ҡарағанда һигеҙ процентҡа кәмерәк.

✓ Өфө аэропорты Рәсәйҙә иң ышаныслыһы тип танылды. Тикшереүселәр илдең популяр аэропорттарында 30 минуттан артыҡ тотҡарлыҡты асыҡлаған. Һуңғы ике йылда Өфө авиаүҙәгендә тотҡарлыҡ туғыҙ проценттан артмаған. Домодедово һәм Внуково аэропорттарында осоштар бик йыш тотҡарлана - 30 һ әм 24 процент. Шереметьево аэропортында иһә 15 процент ҡына.

✓ Ҡырмыҫҡалы районында легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолоуға 75 йыл тулыу уңайынан республика хәрби-тарихи фестивале үтте. Бер нисә майҙанында театрлаштырылған тамаша, хәрби-тарихи реконструкция эшләнде. Байрамға төрлө төбәктәрҙән, шул иҫәптән Һамар, Тольятти, Киров, Новоуральск тарафтарынан ҡунаҡтар килгәйне. Районның фольклор коллективтары тарихи ваҡиғаларҙы, Бөйөк Ватан һуғышының 1942-1943 йылдары ваҡиғаларын да сәхнәләштереп күрһәтте.

✓ "Башҡортостан Республикаһы Әбйәлил районының данлы ҡыҙҙары" тип аталған энциклопедик баҫма донъя күрҙе. Ошо көндәрҙә Өфөлә уның исем туйы уҙҙы. Сараны "Башҡортостан ҡыҙы" журналы ойошторҙо.

✓ Өфөлә Ҡунаҡһарай янында дөйөм майҙаны 2000 квадрат метрлыҡ һырғалаҡ асылды. Ул дүшәмбенән кесаҙнаға тиклем - иртәнге сәғәт 10-дан киске 11-гә, йоманан йәкшәмбегә тиклем 10-дан төнгө 1-гә ҡәҙәр эшләй. ПрокатҠа коньки алырға мөмкин.

✓ 26 декабрҙә Өфөлә "Беҙҙең киләсәк" хәйриә фонды мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәр, уларҙың һаусәләмәт тиҫтерҙәре өсөн "Изге шыршы 2017" республика берҙәм (инклюзив) Яңы йыл фестивален үткәрә. Сара "Рәсәй - дуҫ ғаилә" проекты сиктәрендә ойошторола. Байрамға Башҡортостандың бөтә район-ҡалаларынан ике меңгә яҡын бала саҡырылған. Ойоштороусылар кескәй ҡунаҡтар өсөн бай программа әҙерләй.

ӘЙҘӘГЕҘ, ҺАҠСЫЛ БУЛАЙЫҠ!

# "БЕҘҘЕКЕ"НДӘ...

## миллионлаған "минеке" бар

**Һуңғы ваҡытта баш ҡалала вандализм тигән һүҙ йыш яңғырай башланы, сөнки йә тегендә, йә бында ниндәйҙер зыян эшләнеп кенә тора. Өфө ҡала округы хакимиәте хәбәр итеүенсә, йорт подъездарындағы баҫҡыс майҙансыҡтарына, почта йәшниктәренә, яҡтыртҡыстарға, һүндергестәргә, сарҙаҡҡа менеү йәки подвалға төшөү юлдарының бигенә, лифт кабиналарына, йорттарҙың фасадтарына, домофондарға, сүп-сар урналарына һәм эскәмйәләргә көн юҡ.**



Шулай уҡ идара итеүсе компаниялар йыл һайын йорттарҙы йылытыу миҙгеленә әҙерләгәндә баҫҡыс майҙансыҡтарындағы ватылған тәҙрә быялаларын алмаштырыу өсөн дөйөм суммаһы 1,2 миллионлыҡ быялалар һатып алырға мәжбүр. Был сумма әллә ҡайҙан күктән төшмәй, ошо уҡ йортта йәшәүселәрҙең кеҫәһенән сыға. Ә бит хәҙер күпселек йорттарҙа домофондар тора, уларға еңел генә инеп тә булмай. Тимәк, вандализм йә ошо йортта йәшәүсе балаларҙың һәм үсмерҙәрҙең, йә уларҙың дуҫтарының эше. Һәм улар үҙҙәре йәшәгән йортто ремонтлау өсөн аҡсаны ата-әсәһе, олатай-өләсәһе түләүен аңларға тейеш. Быны аңлатыу, әлбиттә, ғаилә ағзаларының бурысы.

Тағы бер мәлгә иғтибар итмәү мөмкин түгел: быйыл вандалдарҙың эшмәкәрлеге әҙемтәләрен бөтөрөүгә генә муниципалитет 1,5 миллион һум өҫтәмә аҡса бүлергә мәжбүр булған. Был инде ҡайҙалыр яңы балалар майҙансығы, ял урындары, спорт майҙансығы һ.б. төҙөлмәй ҡалды, йәғни халыҡтың уңайлылығы өсөн ниндәйҙер шарт үтәлмәне йәиһә тотҡарланды, тигән һүҙ. Ғәҙәттә, беҙ вандализмды кинерәк мәғәнәлә ҡулланып өйрәнгәнбеҙ, шуға күрәме икән, йорттарҙағы лифт төймәләренең ватылыуы, быялалар ҡыйралыуы, стеналарҙың төрлө һүҙҙәр менән сыбарланыуын вандаллыҡ акты иҫәпләмәй ҡалабыҙ. Шул йәһәттән иң ныҡ ярыҡ икәнлеге уйлап та тормайбыҙ, шикелле. Күптәр иһә донъяны үҙенең фатиры эсендә генә тип күҙаллап, унан ситтә булған ваҡиғаларға күҙ йомоп ҡарарға тырыша.

Ә был ваҡытта вандаллыҡ йәмғиәтебеҙгә ныҡлап үтеп инә бара, йорттарҙың подъезынан башланған насар ҡылыҡтар ҡала урамдарына сыға, парктарға, скверҙарға, мәҙәни һәм архитектура, тәбиғи һәйкәлдәргә зыян килтерә. Декабрь башында БДУ базаһында уҙғарылған "Кала йөҙө - һинең йөҙөң!" тип аталған түңәрәк ҡорҙа ла һөйләшеү тап ошо хаҡта барҙы. Унда ҡатнашыусы белгестәр белдереүенсә, баш ҡалала вандализм күренештәре былтырғыға ҡарағанда артҡан. "Индиго" МБУ-һы директоры Ольга Реутская фекеренсә, "йәмғиәттәге иҡтисади көрсөк халыҡта хәүеф, агрессия артыуына килтерә. Ә 14-15 йәшлек үсмерҙәр бик йыш ошо көрсөккә мөнәсәбәтен ниндәйҙер ҡылығы аша сығара. Моғайын, был тормош кимәленең насарайыуы менән риза булмауҙы күрһәтеүҙең бер формаһылыр!"

Ҡайһы бер осраҡта, эйе, үсмерҙәрҙең яңы тойғолар кисергеһе килә. Ошо йүнәлештә, улар алкоголь һәм наркотик ҡулланып ҡарай, уларҙың йогонтоһонда емергес көс вандализм күренеше булараҡ сағылыш таба ла инде. Шуға күрә, белгестәр белдереүенсә, үсмерҙәр вандализмын иҫкәртеүҙә алкоголизмды һәм наркоманияны профилактикалау мөһим роль уйнай. Шулай уҡ йәш өфөләргә үҙ ҡалаңа һөйөү тәрбиәләү маҡсатында төрлө социаль акциялар, флешмобтар ойоштороу зарурлығы ла бар.

Ә шулай ҙа барыһы ла ғаиләнән килә, моғайын. Берәү ҙә бит үҙ өйөндәге йыһазды ватмай, ундағы матурлыҡты юҡҡа сығармай, киреһенсә, артырырға тырыша. Дәүләттең яңы ҡоролошо, яңы формация кеше аңындағы коллективизмды ҡыҫырыҡлап сығарып, индивидуализмға йүнәлеш алыуҙа яталыр был күренештең төп сәбәбе, сөнки йәмғиәттә хәҙер "беҙҙеке" тигән төшөнсәне "минеке" баҫып китте, әммә "беҙҙеке"гә әллә күпме "минеке" инеүен генә онотҡоҡ, күрәһең. Шулай булмаһа, кеше ҡулы менән эшләнгән нәмәләргә ихтирам, тәбиғи, архитектура ҡомартҡыларына, һәйкәлдәргә һаҡсыл ҡараш булыр ине бит. Әйҙәгеҙ, тирә-яҡта беҙҙең өсөн булдырылған уңайлыҡҡа, матурлыҡҡа һаҡсыл булайыҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

---

тың рус, башҡорт һәм инглиз телендә баҫылған "Алһыу сәскә" китабын алып ҡыуанды.

Әйткәндәй, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы үҙ күҙҙәре менән күрергә телгән балалар өсөн быйыл республикала биш Ҡыш бабай тирмәһе эшләйәсәк. Үҙәк тирмә Өфөлә "Ватан" этнопаркында урынлашҡан, унда 25 декабрҙән 13 ғинуарға тиклем көн һайын "Миҙгелдәр" тип аталған тамаша уҙасаҡ һәм байрамса биҙәлгән шыршының сағыу уттары ҡабыҙыласаҡ. Ҡаланың боҙ ҡаласыҡтары араһында 1-8 ғинуарҙа бушлай автобустар йөрөй. Ҡыш бабайҙың көнбайышығы йорто Октябрьский ҡалаһының "Өйәҙетау" тау саңғыһы курорты биләмәһендә серле урман эсендә тора. Көньяҡ тирмә Ишембай районындағы Торатау итәгендә 28 декабрҙән эшен башлай. Унда балалар һәм йәштәр төрлө тамашалар ойошторасаҡ. Көнсығыш тирмә Учалы ҡалаһы "Родео" тау саңғыһы курорты биләмәһендә ҡуйылған, килгән ҡунаҡтарға бай тарихлы Дерябино ауылына экскурсия тәҡдим итәлә һәм Яңы йыл тамашаһы 9 ғинуарға тиклем дауам итә. Ҡыш бабайҙың төньяҡ тирмәһе Мишкә районының Мишкә ауылында 28 декабрҙә асыла. Һәр тирмәлә Ҡыш бабайға хат яҙыу мөмкинлеге буласаҡ.

---

ҠЫҪҠАСА

# МӘСКӘҮ ТӘЖРИБӘҺЕ...

## беҙгә лә яраҡлы

✓ Мәскәүгә эшлекле сәфәре барышында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Юл хәрәкәтен ойоштороу үҙәгендә (ЦОДД) булды. Мәскәү хакимиәтенең Транспорт һәм юл-транспорт инфраструктураһын үҫтереү департаменты составындағы был учреждение 1999 йылда барлыҡҡа килә. Уның бурысы - транспорт ағымына, юл хәрәкәтен ойоштороу схемаларына һәм стратегияларына баһа биреү, планлаштырыу, проектлау, юл хәрәкәтен ойоштороуҙа хәүефһеҙ һәм һөҙөмтәле программалар һәм схемалар индереү тора. Бынан тыш, Үҙәк ҡарамағына парковкалар урынлаштырыу концепцияһын эшләү, светофорҙарҙы һәм юл билдәләрен ремонтлау һәм ҡулланыу, шулай уҡ интеллектуаль транспорт системалары менән идара итеү ҙә инә. Өфө мэрының Мәскәү коллегаларының эше менән таныşыуының сәбәбе лә бар, сөнки бындай эшмәкәрлек баш ҡалала ла тормошҡа ашырыла.

✓ Өфөлә баш ҡала мәктәптәрендә белем алыусы Башҡортостан Башлығы стипендиаттарын бүләкләү тантанаһы үтте. Сарала ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡатнашты. Ул үҙенең сығышында уҡыусыларҙың ныҡышмаллығы, аҡылы, инициативаһы һәм көндәлек фиҙәкәр хеҙмәте лайыҡлы награда менән баһаланыуын билдәләп, уларға һәм стипендиаттарға белем биргән уҡытыусыларға рәхмәт белдерҙе. Быйыл уҡыуҙа ғына түгел, фәнни-тикшеренеү эштәрендә, баш ҡаланың йәмәғәт тормошонда юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән 12 уҡыусы оло наградаға лайыҡ булды. Өфөлә һәләтле балаларҙы асыҡлау, уларға ярҙам итеү һәм һәләттәрен артабан үҫтереүҙең һөҙөмтәле системаһы булдырылған: уҡыусыларҙың Кесе фән академияһы эшләй, олимпиадалар, фестивалдәр, конкурстар уҙғарыла.

✓ Баш ҡаланың 104-се мәктәбендә, 5-се һәм "Содружество" лицейҙарында Бюджет грамоталылығы көнө үтте. Был сара Рәсәй Финанстар министрлығы менән Бөтөн донъя банкының "Өлкән синыф уҡыусылары өсөн бюджет грамоталылығы" яңы мәғариф программаһы сиктәрендә уҙғарыла. Ул әлегә илдең өс төбәгендә генә тәжрибә рәүешендә үткәрелә. Республикала проект 11 белем биреү учреждениеһында, шул иҫәптән Өфөнөң 4 мәктәбендә тормошҡа ашырыла. Был көндә уҡыусылар бюджеттың формалашыуы һәм уның нисек тотонолоуы, нисек итеп килем һәм сығымдар статьялары барлыҡҡа килеүе, бюджет асыҡлығының төп аспекттары менән таныштылар.

✓ Ошо көндәрҙә баш ҡала йылдың иң күләмле бәхәс ҡоро - "Ике турнир фестивале" үтте. Ул парламент дебаттары буйынса V юбилей республика турниры менән Идара итеү алыштары буйынса I республика турнирын берләштерҙе. Унда төбәктең публика алдында сығыш яһаусы иң көслө вәкилдәре йыйылды. "Быйыл был сараның форматы башҡа йылдарҙағынан айырылып тора, - ти БР "Йәштәр сәйәсәте лигаһы" лидеры В. Сабиров. - Беренсенән, ул IQ Интеллектуаль олимпиадаһының Волга буйы федераль округындағы һайлау этабы булһа, икенсенән, идара итеү алыштары майҙанында эш башланыҡ. Шул уҡ ваҡытта ул йәштәрҙе хоҡуҡи һәм сәйәси фәнгә ылыҡтырыуҙың интерактив формаһы ла".

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Хризантема сәскәһе

❖ Был сәскәләрҙә минераль тоҙҙар, A, B1, B2, PP, C, E витаминдары күп. Шуға ла уны төрлө сирҙәрҙә дауалағанда ҡулланалар. Мәҫәлән, йоҡоһоҙлоҡ йонсотһа, йоҡларға ятыр алдынан сәскә таждарын сәйнәргә кәрәк.

❖ Нервыларҙы тынысландырыу өсөн аҙнаһына 2-3 тапҡыр хризантема сәскәһе төнәтмәһе өҫтәлгән ванна инергә.

❖ Көнбағыш майында төнәтелгән сәскә таждарын һыҙлаған быуындарға һалалар. Сәскә таждары менән умыртҡа бағанаһын даими ышҡыу остеохондроздан ҡотҡара.

❖ Бөйөр ауырыуҙарын туҡтатыу өсөн иммунитетты нығытырға кәрәк. Бының өсөн 1 балғалаҡ хризантема сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуытҡансы төнәтергә, һөҙөргә, тәм өсөн бал, бер нисә бөртөк йөҙөм өҫтәргә. Иртән ас ҡарынға һәм йоҡлар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ Сәскә балы өҫтәлгән хризантема сәскәһе йүткереүҙе баҫа, һалҡын тейгәндә, туберкулездан дауалай.

❖ Баҡсағыҙҙа хризантема сәскәләре үҫтерегеҙ һәм уны салаттарға, беренсе, икенсе блюдоларға өҫтәгеҙ һәм сәләмәт булығыҙ.

### Невралгия

❖ 15-әр грамм тамус (адамов корень) тамырын, керән тамырын, алоэ япраҡтарын ваҡлап, бергә ҡушырға һәм 100 грамм бал, 1 литр араҡы өҫтәп, 7-10 көн төнәтергә. Ауыртҡан урындарға даими һөртөргә.

### Полиартрит

❖ 200-әр грамм бал, медицина үте, глицерин, нашатыр спирты, йодты ҡушып, ауыртҡан урындарға компресс эшләргә. Төнлөк һайын яңынан һалырға.

### Тарамыш тартылһа...

❖ Һуғанды ҡырғыстан ҡырып, шәкәр ҡушып болғатырға ла, марляға һалып, ауыртҡан ергә ҡуйырға, бинт менән нығытырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Элек һабантуй, ҡарға буҡкаһы, халыҡ йыйындары ысын-ысындан спорт байрамына әүерелер булған. Бигерәк тә һабантуй абруйлы үткән. Революцияға тиклем һабантуй, гәҙәттә, ер һөрөүгә төшөр алдынан уҙғарылған. Байрам бәйге, уктан атыу, йүгереп уҙышыу, көрәшеү, бағанаға менеү, дилбегә тартышыу һ.б. спорт уйындары менән үткән. Мәҙәк характерҙағы ярыштар ҙа билдәле, мәсәлән, аяҡтарға ҡапсыҡ кейеп йүгереү, күҙҙе бәйләп көршәк ватыу һ.б. Спорт ярыштары өлкәнерәк балалар араһында ла үткәрелгән. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн "Ҡарға буҡкаһы" кеүек байрамдар ойоштороло. Тимәк, башҡорт байрамдары күңел асыу өсөн генә түгел, ә хәрби хеҙмәткә иң кәслә, иң таҫыллы, иң ҡыйыу ир-егеттәрҙе һайлап алыу сараһы ла булған. Бала-сағаның физик үсешенә хәрәкәтле уйындар ҙа булышлыҡ иткән. Был уйындарға, дәртләнеп китеп, өлкәндәр ҙә ҡушылған. Былар бөтәһе лә әхлаҡи, эстетик тәрбиә биреү менән бергә физик яҡтан да файҙалы булған.

Билдәле булыуынса, яуға барған һуғышсы еңеүенә ышанмай икән, күп осраҡта еңелә. Күп халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла кешегә көс-ҡеүәт, еңеүгә ышаныс биреүсе, бәлә-ҡазанан, ауырыуҙарҙан һаҡлаусы магия барлыҡҡа килгән. Ҡапҡа башына ат башы һөйәген, һарыҡ, кәзә тәкәһе мөгөҙөн, иҫке даға, артыш ботаҡтары эленгән, был ауыз көстәрҙән һаҡлаған. Айыу, бүре, һеләүһендең теш-тырнағы, көмөш тәңкә, уймаҡ, перламутр һиҙәп, ҡаҙ йөнө, ҡабырсаҡ, төҫлө сепрәктәр шулай уҡ ауыз көстәрҙе "ҡурҡытҡан". Йәш баланы күҙгә ҡаратыу тыйылған. Имсәк бала эргәһенә күҙе "каты" кешене үткәрмәскә тырышҡандар. Ошондай йола ла билдәле: бала көслө, сызамлы булып үҫһен өсөн, уны уймаҡ рәүешендә киптерелгән бүре ирене аша үткәргәндәр. Ололар үҙҙәрен һаҡлау өсөн бетеү тағып йөрөгән. Әлбиттә, һаҡлағыс магия уға ышанған кешегә психологик йәһәттән ярҙам иткән - уға көс-ғәйрәт биргән, үҙ һәләтенә, еңеүенә ышаныс тыуҙырған. Һуғыштарҙа, һунарҙа һәм башҡа хәүефле осраҡтарҙа был мөһим роль уйнаған.

Башҡорт халыҡ фольклорының һәр жанрында ла медицинаға ҡағылышлы материал табып була. Байтаҡ әкиәт-легендаларҙа дауа үҫемлеге тураһында һүҙ бара. Кеше анатомияһы, физиологияһы, санитария һәм гигиенаға ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә күп. Был белем байлығы менән балаларҙы, йәштәрҙе таныштырыу бигерәк файҙалы, сөнки ул фекерләү һәләтен үҫтереүгә былышлыҡ итә, һаулыкты нығытырға, һаҡларға, уның ҡәҙерен белергә өйрәтер ине.

Үкенескә күрә, хәҙерге ваҡытта беҙ ошо тәрбиә сараһын насар файҙаланабыҙ, берәүҙәр уны баһалап етмәй, икенселәр халыҡ ижадын яҡшы белмәй. Шул уҡ ваҡытта, әлегә гигиеник мәҙәниәт торошо менән дә маҡтана алмайбыҙ. Ҡайһы берәүҙәрҙә ул түбән, һаулыҡҡа зарар килтереүсе ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә етерлек. Халҡыбыҙҙың быуаттар буйы туплаған тәжрибәһенә ошоларҙы ҡушып ҡулланыу кәрәк. Халыҡ аҡылы халыҡҡа хеҙмәт итергә тейеш.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Аҙағы).**

**РЕДАКЦИЯНАН: Арҙаҡлы докторыбыҙ Варис Зыяҡай улы Ғүмәровтың яҙғандарын уҡығандар, моғайын, үҙҙәре лә өләсәй-олатайҙарҙан ишеткән дауалау йолаларын, алымдарын иҫенә төшөргәндер. Әйҙәгеҙ, шуларҙы аҡ ҡағыҙға төшөрөп, беҙҙең редакцияға яҙып ебәрегеҙ. Варис ағайыбыҙҙың яҙғандарын тулыландырып, "Башҡорт халыҡ дауаһы" китабын бергәләп ижад итәйек, тип мөрәжәғәт итәбеҙ һеҙгә, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ.**

ӘЙҘӘГЕҘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# БАЛАЛАРҒА - ШАТЛЫҠ...

## миңә - килем

**Мөғжизәле ваҡыт етте. Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнеү үҙе үк оло бер байрам кеүек. Нәҡ әлеге мәлдә уҙып барған йылға йомғаҡ яһайбыҙ, башлаған эштәребеҙҙе тамамлап, биргән вәғәҙәләребеҙҙе үтәп ҡуйырға ашығабыҙ. Ғөмүмән алғанда, йылдың һуңғы айы шатлыклы мәшәҡәттәр менән, күңелле ығы-зығылар менән тулы була. Ә үтә лә уңғандар ошо осорҙа кеҫәләрен дә ҡалынайтып ҡала. Маҡтанғандан әйтмәйем, әммә мин дә шулар рәтендә. Килемле генә шөғөлөм тураһында тулыраҡ мәғлүмәт биреп үтәйем. Бәлки, беҙҙең өлгөнө башҡалар ҙа эләктереп алып, ошо рәүешле аҡса эшләүҙе яйға һалыр. Әлеге хеҙмәттәр, тәбиғи, төп эшебеҙҙән тыш башҡарыла һәм өҫтәмә килем алыу сығанағы булып тора.**



Күптәрҙең яратҡан байрамы Яңы йыл алдынан Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың хеҙмәтенә һорауҙың артыуы сер түгел. Балаларҙың шат йөҙөн күреү теләге менән янған ата-әсәләр байрамдың был геройҙарын өйгә күпләп саҡыра. Ихтыяж булғас, бындай хеҙмәтте күрһәтеүселәр ҙә байтаҡ. Беҙ ҙә дуҫтарым менән ошо юҫыкта эшләйбеҙ, ләкин эшмәкәрлегебеҙ икенсе төрләрәк ҡоролған. Фатир, шәхси йорттарға йөрөү күңелебеҙгә ятып етмәгәс, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу булып балаларға урамда байрам ойоштораbыҙ. Аныҡлап әйткәндә, ата-әсәләр менән алдан һөйләшеп-көрешеп, балаларға тигән бүләкте алып ҡуябыҙ. Һәм билдәләнгән көндә һауа һуларға, магазинға барырға йәки башҡа төрлө сәбәп менән урамға сыҡҡан ғаиләгә "көтмәгәндә" тап булып, балаға бүләк тапшырабыҙ. Һеҙ күрһәгеҙ икән, йәмәғәт, ап-аҡ һаҡаллы "ысын" Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың үҙҙәренә исеме менән өндәшеүен ишеткән баланың нисек күҙҙәре яныуын! Уның йыл дауамында яулаған уңыштарын һанап, атаәсәһенә ниндәй ҡылыҡтарының көйһөҙләк килтереүен әйтеп, шиғыр ятлатып, уйындар уйнатып, Ҡыш бабайҙың ҙур тоғонан нәҡ ул теләгән бүләкте сығарыуың була, бәләкәстәр ҡышҡы әкиәткә тағы ла нығыраҡ ышана башлай. Ә ҡыштың төп олатайы ярҙамсыларының - Ҡарһылыуҙың, уҙып барған һәм киләһе йылдың символдарын кәүҙәләндергән хайуандарҙың - бар иғтибары тик уларға ғына төбәлеүен күреү оло байрам булып балалар күңелендә ҡала.

Ошо рәүешле бына инде өсөнсө йыл рәттән Ҡыш бабай булып "эшләйем". Балаларға байрам ойоштороуҙа шулай уҡ дуҫтарым ярҙам күрһәтә. Декабрҙең һуңғы ун көнендә хеҙмәтебеҙгә һорау айырыуса арта. Беҙҙең менән бер күрешкән бала алдағы йылдарҙа ла уның хаҡында барыһын да белеп тороусы һәм, иң мөһиме, күңеле теләгән бүләк тоттороусы Ҡыш бабай менән осрашыуҙы көтә икән. Тимәк, беҙгә йыл да эш була һәм Яңы йыл алдынан кеҫәгә аҡса инеп ята.

Тәүге йылда тик Ҡыш бабайҙы ғына кәүҙәләндерҙем һәм эшмәкәрлегем ошо миҙгел менән бәйле булды. Ләкин йылдың башҡа миҙгелдәрендә аҡса эшләү өсөн "тотоноу" яйын таптым. Хәҙерге ваҡытта йәнһүрәттең күптәрләләгә балаларға һайлап ҡарау мөмкинлеге бирә. Һәр баланың үҙенә оҡшаған йәнһүрәт геройы ла бар. Нәҡ ошо геройҙар миңә аҡса "һуға" ла инде. Ысынбарлыкта әкиәт иленән килеп төшкән яратҡан геройы менән урамда осрашҡан баланан да бәхетлерәк кеше булмай. Ә балаһын шатландырырға теләгән ата-әсә бихисап. Шулай булғас, минең хеҙмәткә лә һәр саҡ һорау бар.

Килемдең күләменә килгәндә, хәлдәр былай. Ҡыш бабай һәм уның дуҫтары булып 30 минутҡа 400 һум алабыҙ. Ә бер көндә, кәмендә, 15 урында булабыҙ. Ә әкиәт геройҙарын һынландырғанда ярты сәғәткә 300 һум һорайбыҙ. Был хеҙмәткә лә аҙнаһына 3-4 тапҡыр заказ була. Кейемдәрҙе күпселек осраҡта ҡуртымға алабыҙ. Шулай уҡ интернет аша осһоҙ хаҡҡа һатып алынғандары ла бар.

Тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән эшмәкәрлектең үҙенсәлектәре һәм нескәлектәре күп. Ҡайһы бер бала асылып китҡәнсе арыу ғына ваҡыт сарыф итергә тура килә. Ниндәйҙер ҡәтғи талаптар ҡуйған һәм шуны үтәүҙе шарт иткән ата-әсәләр ҙә осрай. Тамаша бөткәс иҫәпләшергә тип килешкәндәр түләмәйенсә ҡасырға ла мөмкин. Эш барышында башҡа төрлө көтөлмәгәнлектәр ҙә килеп сыға, шуға күрә барыһына ла әҙер булырға кәрәк.

Бына ошондай шөғөл миңә - аҡса, балаларға - шатлыҡ килтерә. Әлеге эшмәкәрлек менән ҡалала ғына түгел, ауылдарҙа ла шөғөлләнеп була, тик теләк кенә булһын. Шуға күрә, дәртле замандаштарымды минең рәткә баҫырға саҡырам. Әйҙәгеҙ, әмәлдәрен табып, төрлө юлдарын эҙләп, аҡса эшләргә тырышайыҡ. Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда - тырышлыҡ ҡына кәрәк.

**Салауат ҒИЛМЕТДИНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

ФЕНОЛОГ ФАРАЗЛАЙ



# КӨНГӘ ЛӘ ЫШАНЫС ҠАЛМАНЫ



**Йылдар нисек килерен һәр саҡ ниндәйҙер өмөт менән көтәһең, фаразлайһың. Үткән миҙгелдәр, көндәр алда буласағын һөйләгәндәй, яҡшыға өмөтләндергәндәй. Шуға ла күҙәтеүҙәр алып барам. Көндәр торошон көн дә теркәйем. Төрлө сығанаҡтар туплағанмын. Яңы мәғлүмәттәрҙе лә иғтибарһыҙ ҡалдырмайым. Фаразлар ҙа дөрөҫкә сыҡҡандай...**

Районыбыҙ гәзитенә ("Һаҡмар") йәйҙең нисек килерен яҙ белдергәйнем. Раҫ булды. Ә бына йылдың көҙө мине нығ "ултыртты". Ямғыр сентябрҙә башланыр, көндәр матурланыр һымаҡ ине. 1958 йыл ҡабатланырҙай тойолдо. Әммә көҙ башланған ҡараңғы көндәр әле лә дауам итә. Инде өс ай ярым яҡшы ҡояшлы көндө күргән юҡ. Ноябрь нығ һыуытып та алды. Иртә яуған ҡар ирене лә, тағы ҡар өҫтөнә ҡар яуа башланы. Ҡар мул. Ағас-ҡыуаҡҡа йыш ҡына бәҫ ҡуна. Яҙ мул һыулы, иртәрәк килер. Яҙ, йәй башы ҡорораҡ булыр һымаҡ. Ер ҙә ҡапыл тунды. Ағас-ҡыуаҡтар, япраҡты башынан һарғайтып, тигеҙ ҡойҙо. Тик бик һуңланы. Ағастарҙың октябрь аҙағында ғына яланғас ҡалыуы яҙғы һалҡындар билдәһелер. Хәҙер тәбиғәттең үҙгәреүен синоптиктар, фенология фәне әйләре дөрөҫ фаразлай алмай. Тәбиғәттең көтөлмәгән мәлдәре етерлек. Уларҙы мин 2007 йылдан үҙемдең кенәгәмә лә теркәй барғанмын. Бына, мәсәлән:

- 2007 йылдың 19 октябрендә Мәскәүҙә 40 см ҡалынлыкта ҡар яуҙы;
- Ҡашҡар ауылы балалары 1969 йылдың 1 майында Йылайырҙа һыу инде, ә 3 майҙа 30 см ҡалынлығында ҡар яуҙы. Көндәр һыуытты ла ебәрҙе;

Ваҡытында мин "Наука и жизнь" журналының 1968 йылдан 1995 йылға баҫылған "Народный календарь", "Рокот забытых бурь", "Климат на будущее" тигән мәҡәләләр шәлкемен туплай барғайным, шуларҙы китап итеп баҫтырһаң ине, тип хыялланам. Тәбиғәт менән ҡыҙыҡһыныусыларға ҙур уйланыу сығанағы булыр ине. Шул осорҙа "Человек и природа" журналы ла бик матур яҙмалар бирә ине.

Былтыр беҙҙең төбәктә ҡар бик мул яуҙы. Мәгәр, быйыл да ҡар ҡалын була ҡалһа, беҙҙең тирәләге илектәр (башҡалар ҡоралай, ти) ҡырылыр. Үткән йыл улар аслыктан байтаҡ һирәгәйҙе. Яҡшыға юрайыҡ.

Тауыҡ йылы килә, тиҙәр бит, ул үрсемле ҡош инде, йомортҡаһы татлы булһын. Әйткәндәй, ҡыш йылы килмәксе. Өфөлә 1987 йылдың 26 февралендә +6 градус булды бит.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы.**

✓ *Ҡулланыу тауарҙарының 40 проценты шәхси артель тип аталған предприятиеларҙа, беҙҙеңсә, кооперативтарҙа етештерелгән. Быны күптәр белмәй ҙә. СССР-ҙағы тәүге инновацион тауарҙар шәхси артелдәрҙә эшләп сығарылған.*

**Ғәҙәттә, беҙ аҡылды ситтән эҙләйбеҙ, сит ил йәки башҡа милләттең классиктары, уңышлы кешеләре әйткәндәрен ятлайбыҙ, блокнотҡа яҙып ҡуябыҙ. Ул аҡыллы фекерҙәр араһында, әлбиттә, Аҡмулла, Ризаитдин нәсихәттәре, үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәте классиктарының, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек бөйөк шәхестәребеҙҙең әйткәндәре лә урын ала. Улар аҡылы - мәңгелек һәм бөтә замандар өсөн дә яраҡлы. Ләкин заманалар үҙгәрә тора, йәшәйеш ҡанундары, ҡағиҙәләре лә бөтөнләй икенселәй була бара. Заманға ярашлы йәшәйеш аҡылына ла ҡолаҡ һалыу зарур бөгөн. 2002 йылдан, "Киске Өфө" гәзите ижад ителә башлаған мәлдән алып, замандаштарҙан ошо аҡыл-фекерҙәрҙе тирәбеҙ, гәзит биттәренә урынлаштырабыҙ. Кемдер уҡый ҙа күңеленә һеңдермәй, кемдер иһә күңеленә һеңдереп уҡый. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тип, быйылғы йылда гәзитебеҙҙә сығыш яһаусы зыялыларыбыҙҙың ҡайһы бер һиммәтле фекерҙәрен яңынан тәҡдим итәйек әле, тинек. Иғтибар итегеҙ әле: ошо фекерҙәр һеҙҙең күңелдәрҙә урын алғайнымы?**



# ”КИСКЕ ӨФӨ”ЛӘГЕ

***Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты (№9):*** Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Н. Хрущев "коммунизм" төҙөй башлаған ваҡытта: "Әгәр ҙә илдәге кешеләр бөтәһе лә бер телдә һөйләшһә, йәғни рус телендә, беҙ коммунизмды тиҙерәк төҙөйәсәкбеҙ", - тип әйтеп һалғайны. Шунда уҡ башҡа милләттәргә, телдәргә баҫым башланды, уҡытыу рус теленә күсерелде. Ярай, һуңынан туҡтап ҡалдылар. Ғөмүмән, СССР ваҡытында 80-дән ашыу тел юҡҡа сыҡҡан. Бөгөн, мәҫәлән, мишәр халҡы бар, мишәр теле юҡ. Шулай уҡ башҡа халыҡтар ҙа икенсе милләт эсенә инеп китеп юғалған. Бөгөн заманында бөтөн донъяға яңғырап торған ниндәй бөйөк латин теле юҡ. Шул ваҡыттағы боронғо грек теле лә юҡҡа сыҡҡан. Бөгөнгө грек теле менән ул ваҡыттағыһы араһында ер менән күк айырмаһы. Бөгөн дә, бәлки, Рәсәйҙә барыһы ла бер телдә генә һөйләшһен ине, тип теләүселәр, уйлаусылар барҙыр. Ләкин беҙ бер ниндәй ҡыҫымдарға, һынауҙарға ҡарамаҫтан, телебеҙҙе юғалтмайынса һаҡлап ҡала алғанбыҙ икән - ул барыбер һаҡланасаҡ, ике миллионлыҡ халыҡтың телен берәү ҙә бөтөрә алмаясаҡ. Шул ышаныс менән йәшәргә һәм ҡулдан килгән тиклем, бигерәк тә йәштәргә, шул фекерҙе һеңдерергә кәрәк.

***Мәхмүт СӘЛИМОВ, подполковник, Ростов өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе (№8):*** Башҡорт халҡының тарихын һәр ерҙә, һәр саҡ һәм мөмкинлек булған һайын пропагандаларға кәрәк. Үҙеңдең сығышың менән ғорурланыу өсөн тыуған иленде - Башҡортостаныңды яратырға, ата-әсәңде ихтирам итергә, тарихыңды белергә тейешһең. Тыуған илде яратыу, ата-әсәне хөрмәтләү ҡан аша бирелһә, тарихты өйрәнеү өсөн бер аҙ тир түгергә тура киләсәк. Халҡыбыҙ тарихында оялырлыҡ бер нәмә лә юҡ, башыбыҙҙы юғары, ғорур күтәреп йөрөй алабыҙ. Беҙҙең милли геройҙарыбыҙ, милли уйын ҡоралдарыбыҙ, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ гәүһәрҙәре, быуаттар буйына һаҡланып килгән милләтебеҙ һәм иң мөһиме - үҙ еребеҙ бар. Мәҫәлән, Дон казактары беҙҙең айырым республикабыҙ булыуына һоҡлана. Ростовта ойошмабыҙҙы бик йылы ҡабул итәләр, сөнки башҡорт халҡының оҙайлы тарихы нигеҙендә башҡорт һәм рус армияһы, 11-се казак ғәскәре араһындағы дуҫлыҡ ята. Улар барыһы бергә уртаҡ йортобоҙ - Рәсәй өсөн һуғышҡан һәм уны яҡлаған. Был - башҡорт халҡының үҙенсәлеге аша тышҡы дошмандарға ҡаршы берлектәге көрәште, дөйөм илебеҙҙе иңгә-иң терәп яҡлауҙы пропагандалау ул. Сөнки уртаҡ тарих иһә барлыҡ халыҡтарҙы ла берләштерә. Кешеләр бер-береһенән айырып торған үҙенсәлекте түгел, ә берләштереүсе тарихты күрә икән, был һәр ваҡытта ла ыңғай ҡабул ителә.

***Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә (№10):*** Беҙҙең халыҡта мал тип мөкиббән китеү, донъя ҡыуыуға ынтылыу ул тиклем юҡ. "Ниңә беҙҙең халыҡта финансистар, иҡтисадсылар, банкирҙар күп түгел икән?" тип әйтергә яратабыҙ. Эйе, улар беҙгә лә кәрәк. Килеп сыҡһалар, бик һәйбәт. XX быуат башында уҡ был хаҡта мәғрифәтсе, затлы мулла Сафуан Яҡшығолов әйтеп ҡалдырған. Тик беҙ нимә эшләнек һуң шулар тормошҡа ашһын өсөн? Беҙҙең халыҡтың да үҙ йәшәү миссияһы барҙыр ул. Әйҙә, әйтһендәр, башҡорттар бейей, башҡорттар ҡурай тарта, тиһендәр, миңә ҡалһа, беҙ нәҡ шул юл менән һаҡланып ҡалғанбыҙ һәм кешелектең дә рухиәтен һаҡлап ҡалырға тырышабыҙ. Халҡыбыҙ рухиәт, иман, илаһиәт һағында тора кеүек миңә. "Урал батыр" эпосында был хаҡта: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ, тип әйтелә". Бер риүәйәттә әйтелгәнсә, донъялыҡ менән хушлашҡан атай кеше улына үлгәндән һуң кеҫәләрен ҡарарға ҡушып китә. Улы уның төрлө кеҫәләренән аҡсалар таба, бер кеҫәһендә: "Әммә мин быларҙың бер тинен дә үҙем менән тегендә алып китә алманым", - тигән яҙыу таба. Беҙ Хоҙай ҡаршыһына күңелебеҙ менән барып баҫабыҙ бит. Бәлки, шуға әҙерләнәбеҙҙер инде...

***Фирүзә АЛЛАЯРОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы (№14):*** Эстрада ҙур бер диңгеҙ икән, бөгөн унда башҡорт йырсыларының кемелер яхтала, кемелер тапсыҡта йөҙөп йөрөй. Кәмәһе тишелһә, батып та китәләр. Хәтерегеҙҙә булһа, үткән быуаттың 90-сы йылдарында милли эстрадала барлыҡҡа килгән генә мәлдә бер-береһенә оҡшамаған, бер-береһен ҡабатламаған төркөмдәр барлыҡҡа килде: "Дәрүиш", "Рух", "Аҡйондоҙ", "Карауанһарай", "Ант" һ.б. Уларҙың күбеһе хөкүмәт иғтибары булмауы һөҙөмтәһендә юҡҡа сыҡты, сөнки ул егеттәр ғаиләһен дә ҡарарға тейеш ине бит. Ижад һәм уның ярҙамында матди бөтөнлөккә өлгәшеү беҙҙә һәр ваҡыт айырымлана. Ә ул төркөмдәр шуныһы менән көслө булды - һәр береһенең музыкаль белеме бар ине. Бөгөнгө эстраданы ҡый үләне баҫты, улар үҫеп кенә килгән сәскәләргә лә ҡамасаулай. Уҡымаған көйө сәхнәгә сығып йырлауҙы хуп күрмәйем мин. Нисек кенә талантлы булмаһын, йәш кешенең белеме, әҙерлеге юҡ икән, уның сығышы ситтән көлкө лә, ҡыҙғаныс та күренә. Тауар сифатһыҙ икән, уны һатып та булмай. Улар дөйөм күренеште лә боҙа, бөтөн эстрадаға кире ҡараш та уята. Унан һуң, заман үҙгәрә, беҙгә лә үҙгәрергә, шул уҡ йырға тауар итеп ҡарай башларға кәрәктер. Беҙҙең халыҡ, уны кемгә һатам мин, тип ялҡаулана. Донъя хәҙер шуға ҡоролған, эшләгән эшеңде күрһәтә белергә кәрәк.

***Азат БАДРАНОВ, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы етәксеһе (№17):*** Беҙ тик үҙебеҙҙең көстәр менән генә бар ауылдарҙы һаҡлап ҡала алмаясаҡбыҙ. Урбанизация процессы совет осоронда ла барҙы, әммә ул тамамланманы, халҡыбыҙҙың яртыһы тиерлек ауылдарҙа йәшәй һәм милләттең сағыштырмаса ауыр хәле ошоноң менән аңлатыла ла инде. Әгәр ҙә бер илле йыл элек ҡала башҡорттары мәҙәниәте формалашҡан булһа, бөгөн ҡала башҡорттарының һаны ла юғары булыр ине. Беҙ әлеге ваҡытта ике урталыҡта, ауыл менән ҡала араһында торабыҙ. Беҙ үҙ эшмәкәрлегебеҙҙә ауылдарҙан сыҡҡан йәштәребеҙҙе Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына уҡырға индерергә ярҙамлашып, уларҙың ҡалаға өйрәнеүен еңеләйләштереүҙе лә күҙ уңында тотабыҙ. Мәскәү - ул ҡалаларҙың ҡалаһы, унда бер нисә ҡала, бер нисә социаль донъя һыйған. Мәскәүгә һәм Питерға килеүсе башҡорт йәштәре үҙҙәрен ирекһеҙҙән көнөнән бында килеүселәр тип уйламаһындар өсөн беҙ уларҙы ойоштороп, милли мөхит тыуҙырырға тырышабыҙ. Мәскәү һымаҡ эре мегаполистарға башҡорт мәҙәниәтен индереүҙең юлы һәм маҡсаты тап ошонда. Беҙҙең халыҡтың пассионарлыҡ потенциалы бик юғары. Бары тик шул генетик энергияға дөрөҫ йүнәлеш кенә бирергә кәрәк. Хәҙерге ваҡытта Мәскәүҙә башҡорт йәштәре башҡа милләт вәкилдәре араһында иң ойошҡаны иҫәпләнә. Татар йәштәренең финанс ресурстары юғары булһа ла, улар идеяға ҡытлыҡ кисерә. Улар даими рәүештә беҙҙең сараларға килеп тамаша ҡыла, беҙҙән өйрәнә. Беҙ үҙебеҙ үткәргән сараларҙан тыш, халыҡ-ара дуҫлыҡты нығытыу маҡсатын алға һөргән дөйөм йыйылыштарға ла йөрөйбөҙ. Беҙ Мәскәүҙә үткәрелгән шундай позитив сараларға 300-400 кешене алып сығырға һәләтле баш ҡала йәштәр ойошмалары араһында берҙән-бере булып һаналабыҙ.

***Рөстәм ДӘҮЛӘТБАЕВ, иҡтисадсы (№24):*** Ҙурҙан ҡупҡанда, беҙҙә көнбайыштың иркле баҙары бөтөнләй юҡ. Беҙҙә һөнәрселек, кәсепселек (промысловая экономика) иҡтисады өҫтөнлөк итә. Маҡсатты аҡса алыштыра, һәр кеше үҙ һөнәренән килем алырға тырыша. Быларҙан тыш, икенсе идара ысулы ла бар. Ул - "дөйөм эш шәхси милектән өҫтөнөрәк" тигән ҡағиҙәгә нигеҙләнгән "Етештереүҙең Азия ысулы" тип атала. Был да беҙгә хас. Тарихҡа күҙ һалайыҡ. Сталин ваҡытында инновациялар күп булған. Ниндәй маҡсат алға ҡуйылған? Кешене йыһанға осороу маҡсаты. Йыһанды яулау хыялы кешеләрҙе илһамландырған. Күҙ алдына килтерәйек әле: 1945 йылда Советтар Союзы һуғыштан иң күп юғалтыуҙар кисереп килеп сыға. Һәм, 1945 йылдан алып, 16 йыл эсендә, СССР иҫ киткес тиҙ үҫеш алып, Гагаринды йыһанға осороуға өлгәшә. Был - меңәр йылдар буйы күрелмәгән хәл. Был алға китештең нигеҙ ташы нимән ғибәрәт инде? Иосиф Сталин режимында ҡулланыу тауарҙарының 40 проценты шәхси артель тип аталған предприятиеларҙа, беҙҙеңсә, кооперативтарҙа етештерелгән. Быны күптәр белмәй ҙә. СССР-ҙағы тәүге инновацион тауарҙар (телевизор, радиоалғыс, радиола), көнкүреш тауарҙарының күпселеге шәхси артелдәрҙә эшләп сығарылған.

***Динар АҠМЫРҘИН, грэпплинг федерацияһының "Тархан" һуғышсылар командаһы етәксеһе, грэпплинг буйынса спорт мастеры, Халыҡ-ара һәм региональ турнирҙар еңеүсеһе, Башҡортостан чемпионы (№25):*** Бөгөн йәштәрҙең тормошта үҙ юлын таба алмай ҡаңғырыуы уларҙың эске һәм тышҡы көсһөҙлөгөнән килә. Тимәк, ата-әсәләре уларҙы тамағына ашағанмы, йылы кейенгәнме, итеге өйкәмәйме, шарфы бармы, тип, ҡолға буйлы булғансы әпәүләгән. Әлбиттә, ата-әсәнең һөйөүе һәм ҡайғыртыуы тәбиғи. Әммә баланы йәлләүҙең, бәпләүҙең самаһы булырға тейеш барыбер. Минең үҙемде атайым улай әпәүләп торманы, ҡаты булды. Шуға ла бәләкәйҙән үҙаллы булдым. Ун ике йәштән интернатта йәшәнем. Һәм ошолар миңә бөгөнгө хәләтемә килеп етеүгә булышлыҡ итте. Ир баланы бәләкәйҙән "ир" булыуға әҙерләргә кәрәк. Шундай башланғыс алмайынса, спорт өлкәһендә нимәгәлер өлгәшеп тә булмай...

***Мазһар ИҪӘНБАЕВ. иҡтисад фәндәре докторы, профессор (№38):*** Ауылдарҙа үҫеш перспективалары ҙур ғына ул. Бының өсөн урындағы байлыҡтарҙы дөрөҫ һәм һөҙөмтәле файҙаланыу зарур. Иң беренсе ер ресурсын файҙаланыу кәрәк. Ерҙәр хәҙер һөрөлмәй, эшкәртелмәй ята, сәселмәгән баҫыуҙар күп. Ер пайҙары ла файҙаланылмай. Урындағы тәбиғи шарттарға нигеҙләнеп, ерҙәрҙе эшкәртеп, кәрәкле продукттар етештереп, ауыл хужалығын алға сығарырға кәрәк. Был бәләкәй

✓ *"Этно"ны сәхнә күргәҙмәһе менән генә сикләп ҡуйҙылар. Йыр, бейеү, тирмәләр... Уйлап ҡараһаң, атта сабыу, "Ылаҡ", "Ҡыҙ ҡыуыу" уйындары шул уҡ этно. Һабантуй ҙа - этно. Тик уның этно үҙенсәлектәрен юғалтып ташланыҡ.*



# АҠЫЛДЫ АҢЫБЫҘҒА ҺЕҢДЕРӘЙЕК!

фермерҙарҙың ғына хәленән килмәй. Беҙгә хәҙер кооперацияны үҫтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Ауыл хужалығын, ит, һөт, йөн, иген эшкәртеү, икмәк бешереү кеүек етештереү сәнәғәте тармаҡтарын үҫтереү зарур. Һис һүҙһеҙ, ауылға иғтибар арттырыу кәрәк. Республиканың ғына түгел, тотош илде алып ҡараһаң да, бөтөн үҫештең нигеҙен ауыл тәшкил итә. Бөтөн ресурстар ауылда бит: ер, һыу, урман, иген, мал.

***Айнур АРЫҪЛАНОВ, Башҡортостан мосолмандары диниә назараты рәйесенең беренсе урынбаҫары (№39):*** Ҡөрьән милләтте инҡар итмәй. Унда "мин һеҙҙе халыҡтар, ҡәбиләләр итеп яралттым, бер-берегеҙҙән өйрәнһен өсөн, һеҙҙең арала иң тәҡүәлеләре минә иң яҡындары... " тиелә. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә башҡорттарҙы - башҡорт, урыҫтарҙы - урыҫ, инглиздәрҙе - инглиз, француздарҙы француз итеп яралтҡан. Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәнән ҡыуылғас, унда ҡалған үҙ халҡын һағынып илай, үҙенең тыуған ере, халҡы өсөн ҡылыс тотоп һуғышып йөрөй. Ғәскәр төҙөгәс, иң тәүҙә Мәккәне, халҡын азат итә. "Ожмах - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында, атайҙарға хөрмәт", тип әйтте Бәйғәмбәребеҙ. Әсәйең, атайың, туғандарың - улар барыһы бергә һинең ҡәбиләң, халҡың, ошоларҙан һуң нисек дин милләтте инҡар итһен инде?

Һәр мосолман үҙенең милләтен һаҡларға, яҡларға бурыслы. Беҙ Аллаһы Тәғәләнән ҡалған аманат. Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә, кемдер берәү үҙенең атаһын һәм халҡын танымаһа, икенсе кешене үҙенең атаһы тип таныһа, үҙен башҡа халыҡтың вәкиле итеп белһә, уға тамуҡта урын әҙерләнеүе хаҡында әйтелә. Тимәк, кемдәр үҙенең балаһына туған телен өйрәтмәй, үҙ милләтенең рухында тәрбиәләмәй, уларға Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуап бирергә тура киләсәк. Чечняла дөрөҫ дини һәм ғаилә тәрбиәһе алған егеттәр үҙҙәренең республикаһы, милләте хаҡында ғорурланып сығыш яһай. Татарстанда татар егеттәре "Безнең Татарстаныбыз, халҡыбыз, динебез", тип һөйләй. Башҡортостанға ҡайтып: "Мин башҡорт", - тип әйтеүең була, милләтсегә әйләнәһең дә ҡуяһың.

Нишләп улай һуң? Ни өсөн Аллаһы Тәғәлә мине башҡорт итеп яралтып, мин үҙ республикамда үҙемде башҡорт итеп тойоп йәшәүем менән милләтсе булып һаналам? Мин Рәсәй илемде лә яратам, ул нығынһын, тип, көслө дәүләт булһын, тип, көнө-төнө доға ҡылам. Шул уҡ ваҡытта мин үҙемдең республикамды ла, милләтемде, тамырҙарымды, ҡурай моңон яратам. Тыуған илен, ата-әсәһен, халҡын яратҡан кеше милләтсе икән, милләтсе булырға ла ризамын. Был һүҙҙәремде мин бөтөн кешеләр алдында, һәр рангтағы власть алдында әйтә алам. Былар минең Аллаһы Тәғәләгә тәрән инаныуымдан, иманымдан килгән хистәр. Кемдең йөрәгендә ошондай хистәр бар, улар тоғро юлда.

***Юлай ҒӘЛИУЛЛИН, "Любизар" беренсе башҡорт атлы полкы идараһы рәйесе урынбаҫары (№44):*** Эйәрле-йүгәнле ат һәр башҡорт күңелендә ята. Бары әлегә халыҡ башҡорт атлы ғәскәренең нимә икәнен аңлап етмәй. Уның яу яланында ниндәй ҡөҙрәткә эйә икәнен дә белмәй. Борон-борондан атлы яугирҙың ниндәй юлдар, ниндәй ер-һыуҙар кисеп, ниндәй генә алыштар аша үтеп килеүен барлай башлаһаң, башҡорт ҡатнашмаған бер һуғыш та булмағандыр ул, тигән фекергә киләһең. Шуларҙы онотоу - енәйәт. Шул уҡ ваҡытта атлы яугирҙың ҡоралын, йыһаздарын, алымдарын, уға бәйле ауыҙ-тел һәм башҡа ижадты ла өйрәнеү - милли мәҙәниәтебеҙ ҙә. Юғиһә, беҙҙә көнкүреш мәҙәниәте генә өйрәнелә. "Этно"ны сәхнә күргәҙмәһе менән генә сикләп ҡуйҙылар. Йыр, бейеү, тирмәләр... Уйлап ҡараһаң, атта сабыу, "Ылаҡ", "Ҡыҙ ҡыуыу" уйындары шул уҡ этно. Һабантуй ҙа - этно. Тик уның этно үҙенсәлектәрен юғалтып ташланыҡ. Көрәште лә, ат сабышын да спортҡа ғына ҡайтарып ҡалдырҙыҡ. Тәүбашланғысындағыса иткәндә - ул этно. Көрәшһендәр ауырлыҡ буйынса түгел, ә элеккесә - һуңғы батыр ҡалғансы. Таш күтәреүсе, уҡ атыусы, сәсәндәр, ҡурайсылар, йыр-бейеү башҡарыусылар халыҡ араһынан булһын. Мәҫәлән, бөгөнгө һабантуйҙарҙа ниңә бағанаға менәләр, ул ҡайҙан килеп сыҡҡан? Борон мәргәнлектә ярышыусы һыбайлылар бағана осона төбәп атҡан һәм уҡтарҙы алып төшөүсе үрмәләүселәр булған. Бөгөн бағанаға бүләк алыр өсөн генә менәләр. Атһындар ине башта уҡ, уны алып төшөүсене бүләкләһендәр ине. Шул уҡ бәүелеп торған ауыш бүрәнәгә менеп, осонаса атларға тырышыу ҙа һыбайлының яу күнекмәһенән ҡалған. Сабып барған ат өҫтөндә һынды тота алыу оҫталығы бында...

***Олег ХАНОВ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе (№46):*** Бөгөн мине иң һыҙландырғаны - телебеҙҙең ярлыланыуы. Заманы шулай, тип аҡланып тороп булмай, шулай ҙа мәктәптәрҙә башҡорт теленең ҡыҫырыҡланыуы, интернеттың киң ҡулланылыш алыуы, башҡа сәбәптәр телебеҙҙе ярлыландыра, телмәребеҙгә инглиз, рус һүҙҙәрен әүҙем алып инә. Мәҙәни революция кисерәбеҙ, тигән булдылар, бер ниндәй ҙә революция түгел, ә рухи ҡиммәттәрҙең емерелеүе, телевизор экрандарындағы американлаштырыу был. Беҙҙең маҡсат - быларҙың береһенә лә ҡарамайынса, телебеҙҙе һаҡлау. Телдә халыҡтың рух көсө.

***Ринат ЙОСОПОВ, танылған ғалим-антрополог (№47):*** Һәр бер халыҡтың генетик мәғлүмәтен ҡыҙ-ҡатындар йөрөтһә лә, генетик популяция ирҙәр арҡаһында ҡеүәт йыя. Шул уҡ ваҡытта ирҙәр аша күскән иң көслө үҙенсәлекте, генетик мәғлүмәтте ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрендә алып ҡала. Тап ошо рәүешле көсәйеү арҡаһында беҙҙең башҡорт халҡында биш антропологик тип формалашҡан. Быны 1967 йылда Мәскәү антропологы Мария Степановна Акимова иҫбат итеп: "Башҡорт халҡының генетик фонды төбәктә иң көслөһө, сөнки улар үҙҙәренең ата-олаталарының, сарматтарҙың, савроматтарҙың, уғыҙҙарҙың, ҡыпсаҡтарҙың һәм башҡаларҙың генофондын үҙҙәрендә берләштергән", - тип белдерҙе. Беҙҙең халыҡтың милләт булараҡ көсө лә тап ошонда, сөнки төрлө климат шарттарында йәшәгән төрлө халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең генетик үҙенсәлектәре беҙҙең халыҡтың генофондын тәшкил итә. Ундай үҙенсәлек төрҙәре беҙҙең ирҙәрҙә йәшәй, ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙа иһә асылда ике генә - Урал һәм боронғо Урта Азия тибы һаҡлана. Ә ирҙәребеҙҙә иһә, ошо ике типтан тыш, көньяҡ Себер, понтик, Алтай, Каспий, Алғы Азия һәм башҡа типтар йыш осрай. Типтарҙың төрлө-төрлө булыуы тоҡомдо көсәйтә, генофонды арттыра. Беҙҙең милләттә ырыуҙарҙың күплеге һәм уларҙың донъяның дүрт тарафы менән бәйле булыуы башҡорттоң этник тотороҡлоғон барлыҡҡа килтереүсе фактор ҙа булып тора. Башҡорт милләте донъялағы бик күп халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең иң көслө һәм күркәм сифаттарын үҙендә берләштерә алған. Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки милләт-ара никахлы ғаиләләрҙә ҡала шарттарында башҡорт позицияһы көслө түгел. Беҙҙең милләттең милләт эсендәге ырыу-ара никах потенциалы милләтебеҙгә яңы һулыш бирер ине. Бер типҡа ҡараған халыҡтар ҙа бар, уларҙа беҙҙәке кеүек никах потенциалы бөтөнләй юҡ, шуға ла, бигерәк тә Себерҙәге аҙ һанлы халыҡтар араһында, яҡын туғандарҙың өйләнешеүе арҡаһында уларҙың кәгезләнеүе күҙәтелә.

***Шамил МОТАЛОВ, Санкт-Петербургта йәшәүсе һәм эшләүсе инженер-геолог (№47):*** Заман башҡорто тәү сиратта һөҙөмтәле һәм мәғлүмәтле булырға тейеш. Сөнки бөгөн мәғлүмәт бик күпте хәл итә. Әгәр мәғлүмәткә эйәһең һәм уны ала беләһең икән, унда инде башҡаларҙан алдараҡһың. Заман башҡорто үҙен һәм эшен күрһәтә белергә тейеш. Шулай уҡ заман башҡортона милли рух, тел, дин һәм ошоларҙы тулыландырып тороу өсөн тыуған ер кәрәк. Хатта беҙ, ситтә йәшәгән башҡорттар ҙа, тыуған еребеҙгә ҡайтып, ниндәйҙер көс алабыҙ. Башҡорт теле, тарихы һ.б. тураһында әйтеп тормағанда ла була, сөнки был төшөнсәләр һәр башҡорттоң ҡанында ятырға тейеш. Беҙгә бары тик үҙ телебеҙҙә һөйләшергә, уны балаларыбыҙға өйрәтергә, тарихыбыҙҙы башҡа халыҡтарға танытырға, ер йөҙөндә башҡорт тигән милләт тә булыуын иҫтәренә төшөрөп торорға кәрәк.

Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау ҙа насар, сөнки һәр төбәктең үҙ кимәле була. Башҡортостан вуздарында белем алыуҙың билдәле бер кимәле бар, шунан артыҡты алып булмай. Мәскәүҙә һәм Питерҙа был кимәл юғарыраҡ, сөнки уҡытыусылар, мөмкинлектәр ҙә, үҙ өлкәһендә алдынғы булған кешеләр ҙә күберәк. Һәм һин унда тап ошо юғарыраҡ, артығыраҡ, күберәк белем артынан барыуыңды белеп, аңлап юллаһаң. Шуға күрә, ситкә китеүҙә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем, иң мөһиме - кире ҡайтыу һәм Башҡортостанға хеҙмәт итеү өсөн стимул булһын. Ундай стимул юҡ, бер нәмә лә тартып тормай, уҡыған ереңдә ныҡлы урынлашҡанһың һәм бында ҡайтып, яуланған ҡаҙаныштарыңдан түбәнерәк һөҙөмтә алаһың икән - был ысынлап та, проблема. Әгәр кире ҡайтыу һәм республиканы күтәреү стимулы бар - һине көтәләр, һине ҡабул итергә әҙерҙәр, һиңә әлеге ваҡытта яулаған уңыштарың кимәлендә эш тәҡдим итәләр, шарттар насар түгел икән - йәштәр шул ваҡытта кире ҡайтасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошондай аҡыллы сығыштар, һиммәтле фекерҙәр гәзитебеҙҙең һәр һанында урын ала. Уларҙы, әлбиттә, интернет донъяһында уҡырға өмөт тә итмәгеҙ. Шуның өсөн гәзитебеҙ менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалып, аҡыл ҡаҙнаһын тултырышыуға үҙегеҙ ҙә ярҙам итһәгеҙ ине. Беҙ беләбеҙ: уҡыусыларыбыҙ араһында аҡыл һәм тәжрибә менән бүлешә алыусылар бихисап. Аҡыл уртаҡлашып, башҡалар әйткән аҡылды күңелдәргә һеңдереп йәшәйек!**

✓ Эшһеҙ ятҡан ауылдаштары ла, ошо йүнселдәргә ҡарап, бер аҙ тартыла төштө, сәмләнешеп йорт-хужалыҡтарына тотондо - һәр хәлдә, ошоға тиклем ойоп ятҡан ауылдаштарын ҡуҙғатып, уятып ебәрҙе Оптимист.



ОПТИМИСТ БУЛАЙЫҠ!

# "БЫНДА БӨТӘҺЕ ЛӘ - ЯЛАНАЯҠ..."

**Бик күп кинәйә, көләмәс, ишаралар ишеткәнем, уҡығаным бар, ләкин был йәһәттән хәтер хөртөрәк минең: ҡыҙғаныҫҡа, уларҙы шундуҡ онотам. Ғүмеремдә иҫтә һаҡланған бер генә көләмәс бар, шуны һеҙгә лә һөйләйем әле.**

Оптимист менән пессимист хаҡында ул. Ҙур ғына бер аяҡ кейемдәре фирмаһы эшен тағы ла киңерәк йәйелдерергә уйлай. Ошо маҡсаттан сығып, фирма етәксеһе урындағы ихтыяждарҙы өйрәнеү маҡсатында Африка илдәренең береһенә пессимист бер хеҙмәткәрен ебәрә. Ә уныһы барып етеү менән: "Бында беҙгә эш юҡ - бөтәһе лә яланаяҡ йөрөй", -тип телеграмма һуға. Ул ҡайтып төшөүгә, етәксе шул уҡ илгә оптимисты ебәрә. Барып төшөү менән оптимистан шатлыҡлы хәбәр килә:"Бында беҙгә эш муйындан - бөтәһе лә яланаяҡ йөрөй". Бына шуның кеүек, тормошта ла бер үк мәсьәләгә ике төрлө ҡарарға мөмкин булыуын йыш ҡына онотоп ебәрәбеҙ. Был бигерәк тә берәй проблема килеп тыуғанда ныҡ һиҙелә: мәсьәләне анализлау, уны хәл итеү юлдары хаҡында уйлай башлау урынына йыш ҡына: "Юҡ, булмай был минән..." - тип сигенеү, еңелде һайлауға биреләбеҙ. Бәй, шулай анһат та! Ҡыл да ҡыбылдатырға кәрәкмәй, булмай - и баста!

Былағайҙар, "илаҡ" һәм мыжыҡтар юлы был - еңел, тик рухи көрсөктән башҡа бер нигә лә илтмәй торған юл. Ныҡыштар, маҡсатлылар, һәр нәмәнең ыңғайын күреп, йүнен табыусы оптимистар, әлбиттә, бөтөнләй икенсе, аҡыл эйәһе әйтмешләй, Ер шарының ҡояшлы яғында йәшәүсе яҡты күңелле кешеләр улар. Тап ана шундай ағалы-ҡустылы ауылдаштары хаҡында яңыраҡ ҡына редакциябыҙға килеп киткән бер танышым һөйләп китте: "Был бер туғандарҙың өлкәне армиянан алда ауыл хужалығы техникумы тамамлағайны, хеҙмәт итеп ҡайтҡас, әле бер, әле икенсе эшкә тотоноп ҡараны, килтереп сығара алмай, ташлап ҡуйғайны, йәнә лә армиянан ҡустыһы ҡайтып төштө. Уныһы хеҙмәткә китерҙән алда ҡалала ҡайҙалыр эшләп йөрөгәйне. Үҙе әйтеүенсә, "стихияһы" ауылда булған икән. Шешәгә ҡуҙ ата башлаған ағаһын төрткөләп-типкеләп тигәндәй ҡуҙғатып, ниһайәт, уның башламаҫ борон ташлап ҡуйған эшен дөрләтеп ебәрҙеләр бит! Фермерлыҡ эштәре һарыҡ үрсетеү булһа ла, башмаҡтар ҙа аҫрайҙар, хәҙер килеп бер өйөр йылҡылары бар. Ҡатындары бейә һауып, ҡымыҙ бешә, хатта ҡыш та яһайҙар был шифалы эсемлекте. Ҡаҙы эшләп тә һаталар. Ҡыш һуғым мәлендә ҡапҡа төптәренән машина өҙөлмәй: килеп тә алып китәләр итте, үҙҙәре лә ҡалаға алып барып һаталар: район баҙарында сауҙа нөктәләре бар. Мал ҡараусы булып ауылдаштары ялланды, уларына бер тигәс тә эш булды. Бына шулай итеп, бер ниндәй һөнәре булмаһа ла, ағаһын "уҡытты" бит оптимист егетебеҙ. Уларҙың унышына ҡыуанып бөтә алмайбыҙ: бөтөн ауыл шуларға ҡарап тора, бик ярҙамсыл, мәрхәмәтле булып сыҡты егеттәребеҙ. Әле иттән ярымфабрикат цехы асырға ниәтләйҙәр. Эшһеҙ ятҡан ауылдаштары ла, ошо йүнселдәргә ҡарап, бер аҙ тартыла төштө, сәмләнешеп йорт-хужалыҡтарына тотондо, ҡайһылары Себергә эшкә юлланды - һәр хәлдә, ошоға тиклем ойоп ятҡан ауылдаштарын ҡуҙғатып, уятып ебәрҙе Оптимист. Беҙ уны тап шулай тип йөрөтәбеҙ ҙә, ысын исемен бәреү ҙә иҫләмәйҙер ҙә, моғайын. Әйткәндәй, ситтән тороп иҡтисадсы һөнәренә уҡып та йөрөй әле ул!"

Эйе, тап ана шундай уңышлылар, оптимистар заманы бөгөн. Уйлап ҡарайым да, ниндәй холҡо менән донъяға килһә лә, ахыр сиктә, бик теләһә, алдына маҡсат ҡуйһа, һәр кем үҙен оптимист итеп тәрбиәләй алалыр, моғайын...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ШАЯРЫП, ШАЯРТЫП ЙӘШӘЙЕК!



**"Көтөлмәгәнлек эффекты" хаҡында ишеткәнегеҙ бармы? Психологтар фекеренсә, кешегә көтмәгәндә ниндәйҙер мәғлүмәт еткергәндә уның асылы лакмус ҡағыҙындағы кеүек сағыла, имеш. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Ни өсөн тигәндә, кеше был осраҡта тәжрибәһен, аҡылын файҙалана алмай, аң төбөндә ниндәй мәғлүмәте булһа, шуны сығара. Йәшерәк саҡта һүҙе менән бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмаған, үҙен һәр ваҡыт батыр итеп күрһәтергә, маҡтанырға яратҡан бер егетте ҡараңғы төндә ҡурҡытҡайным, табанын да күреп өлгөрмәй ҡалдым. Кемдең кемлеге һүҙҙәрендә түгел, ғәмәлдәрендә сағыла шул...**

**Һәр хәлдә, был турала бик оҙаҡ итеп һөйләргә, төрлө дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине. Яңы йыл алдынан "Бәйләнештә" сайтында әйләнеп йөрөгән төрлө шаярыуҙарҙы берләштереп, үҙемсә әүәләп, бер нисә дуҫыма ике текст ебәрҙем. Аҙаҡ уларҙың был хатыма нисек яуап биргәндәрен ҡарап ултыра торғас, бик ҡыҙыҡлы "Яңы йыл шаярыуҙары" килеп сыҡты. Иң тәүҙә үҙем ебәргән хатты, артабан дуҫтарымдың яуаптарын бирәм.**

***Беренсе хат:***

*"Бөгөн һинең турала ишетеп, тетрәндем. Миңә шундай һүҙ әйттеләр, белмәйем, бынан был яғына мин һинең менән нисек аралашырмын икән? Был һүҙҙәр бер нисек тә башыма һыймай, әммә ышанырға тура килә. Ҡалайтаһың... Миңә һинең өсөн оят булып китте, йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килде. Һиңә хәҙер нимә тип әйтергә лә белмәйем. Был хакта башҡалар ҙа белһә, һинең менән аралашыуҙан баш тартасаҡ. Дуҫың булараҡ, миңә лә ҡырын ҡараясаҡтар. Миңә бөгөн шул хакта әйттеләр: һин Ҡыш бабайға ышанмайһың икән... "*

**Айгөл Айытколова:** Текстың аҙағына еткәнсе бөтә булған гәмәл-ҡылыҡтарымды, кемгәләр нимәләр әйткәндәремде барлап сыҡтым...

**Гөлнур Ҡыуатова:** Уф, Әхмәр ағай... Хатыңдың аҙағына еткәнсе, әллә нимәләр уйлап бөттөм. Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә икебеҙ хаҡында көләмәс ебәрәм. Бына ул:

- Заман шиғриәте менән танышһыңмы?

- Әлбиттә!

- ӘхмәрҮтәбайҙы ГөлнурҠыуатованан айыра алаһыңмы?

- Күрһәт фотоларын!

**Зилә Ниғмәтуллина:** Мин Ҡыш бабайға ысынтылап ышанамсы. Ышана инем... Ләкин бер көндө Данияр улыма: "Балалар баҡсаһына йөрөргә кәрәк, Ҡыш бабай килеүгә йыр, бейеү, шиғыр әҙерләргә кәрәк, атыу бүләк бирмәҫ", - тигәйнем, шундай яуап алып тетрәндем: "Бүләк алмаһаң ни, ҡарттайым пенсияһына эпирер әле!.." Ҡырҡ йылға яҡын Ҡыш бабай барлығына ышанып йөрөгән кеше өсөн был аяҙ көндә һуҡкан йәшендән дә көслөрәк булды...

**Сәлимә Ғафарова:** Ауыҙымды асып, аптырап, саҡ аҙағына тиклем уҡып бөттөм хатыгыҙҙы!

**Рита Өмөтбаева:** Уф! Әхмәр ағай! Шаяркин!

**Гөлшат Ҡаһарманова:** Ышанмайым шул...

**Әлимә Ғәлләмова:** "Минең турала хет әллә нимә һөйләһендәр, хәҙер бер ниҙән дә ҡурҡмайым",- тип яуап яҙа башлағайным инде һиңә, Әхмәр. Ә Ҡыш бабайға һаман ышанам!

**Айгөл Иҙелбаева:** Алйот, тиһән, ҡыйын була инде, йөрәгем туктай яҙҙы...

**Фирүзә Абдуллина:** Һин нимә, мине үлтерергә итәһеңме әллә?

**Насип Һаҡмаров:** Эй, аптырайҡурҡа саҡ уҡып бөттөм... Ул хәтлем ҙур эш боҙғаным юҡ, шикелле, тип... Ҡыш бабайға ышанмайым шул, сөнки һуңғы 3 йылда үҙем Ҡыш бабай булып йөрөп, балаларҙы ҡыуандырам.

**Тәнзилә Дәүләтбирҙина:** Уф, аптыраттың! "Ашҡаҙар"радиоһы аша сығыш яһағанда пьеса яҙа белмәйем, ти инең. Бына был драматургия!

**Миләүшә Годбодь:** Эй, Әхмәр, мин ҡайғыларға батып ултырам шул... Исмаһам, аҙыраҡ йылмайып алдым...

**Рәшиҙә Махиянова:** Ейәнсәремә 3 йәш ине. Балалар баҡсаһынан шыр-

ӘЙҘӘГЕҘ!




# ҮҘ ЙЫРҘАРЫБЫҘҘЫ ЙЫРЛАП...

**"Башҡорт йыры" телевизион конкурсынан тыш Яңы йыл байрамын күҙ алдына ла килтереп булмай хәҙер. Бәйгенең Гала-концерты үтеүе тамашасылар һәм телевизор ҡараусылар өсөн байрам яҡынлашыуының бер билдәһе булһа, был проектта үҙен һынаусылар өсөн тотош йыл байрамға әүерелә.**

"Башҡорт йыры" конкурсының телевизион форматта барыуы уның төп уңышы, сөнки телевидениеның мөмкинлектәре лә ҙурыраҡ. "Ирәндек моңдары" кеүек оҙон көй бәйгеләре республикала үтеп торһа ла, улар бер нисә йылға бер тапҡыр ғына була. Ә был бәйге йыл дауамында бара, йырсыларға үҙенсәлекле реклама ла булып тора, тапшырыуҙарҙы дәреслек һымаҡ ҡулланырға ла ярай. Икенсе яҡтан, был тапшырыуҙар телевидениеның үҙенең рейтингын да күтәрә, халыҡ уларҙы күп ҡарай.

Шуға ла талаптар ҙа юғары беҙҙә, йырсылар башҡарыу, стиль, хатта сәхнә костюмы йәһәтенән әҙләнергә тейеш. Эйе, "Башҡорт йыры"нда кейемгә лә талапты юғары ҡуябыҙ, сөнки сәхнә - ул зауыҡ тәрбиәләй торған урын.

Беҙҙең халыҡ бөгөнгө глобалләшеү шарттарында ла боронғо, тимәк, үҙенең ысын сәнғәтен һаҡлай, бында был проекттың да өлөшө бар.

Йырсының кимәлен, мөмкинлеген күрһәтә торған әйбер ул боронғо йырҙар. Шуныһы ҡыуаныс, йылдан-йыл матур йырсылар үҫеп тора. Быйыл ойоштороу комитетына 100-гә яҡын ғариза килгәйне, финалға 11 башҡарыусы сыҡты. Еңеүсебеҙ икәү булды. Йәш музыкант Илнур Ишембаев менән З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты Нәргизә Аралбаева иң яҡшылары тип танылды. Уларҙың киләсәктәре лә ошондай еңеүҙәргә бай булыр, тип ышанабыҙ. Гала-концертта йылдың иң яҡшы йырҙары ла билдәләнде, был да йырсыларҙы яңы йырҙар ижад итеүгә дәртләндерә, сөнки үҫеш даими булырға тейеш.

шы байрамынан ҡайтты ла, былай ти: "Өләсәй, ә ысын Ҡыш бабай юҡ икән..." "Нинә булмаһын, ти?" - тип аптырап киттем. "Сөнки бөгөн баҡсала Ҡыш бабай булып тәрбиәсебеҙ кейенеп килгәйне. Танауынан таныным", - тип көлдөрҙө. Шунан бирле мин генә түгел, ә ейәнсәрем дә Ҡыш бабайға ышанмай...

**Нәсимә Тимерова:** Ыстағафирулла тәүбә, тиген, кешенең ҡотон осорҙоң...

**Сулпан Миңлебаева**: Уф, Алла! Алдағы һүҙҙәреңде уҡығанда мейемә ҡан йүгерҙе, эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Йөрәккә приступ була яҙҙы, билләһи! Был ни ғәләмәт икән, нindәй насарлыҡ эшләнем икән, тигән уйҙан аптырап киттем. Аллаға шөкөр, Ҡыш бабайға ышанам мин!

**Айһылыу Әлибаева:** Йөрәгем тукраны...

**Зарифа Аралбаева:** Уф, Аллам, ҡалай яман шаяртаһығыҙ, Аллам һаҡлаһын, кеше үлтерҙемме әллә, тип торам...

**Зилә Авзалова:** Башта текстың аҙағына ла етмәйенсә, һинә тоҙло-боросло яуап яҙҙым һәм "Бәйләнештә"ге үҙемдең дуҫтар исемлегенән һине алып ташланым. Шулай ҙа аҙаҡ тексты яңынан уҡып сыҡһам... көлөп бер булдым. Һин һаман шул Ҡыш бабайға ышанған Әхмәр икәнһең...

**Рәшиҙә Байрамғолова:** Һаумы, нимә кеше ҡурҡытып әллә нимәләр яҙып ятаһың? Башҡа эшең юҡмы әллә?..

**Марат Ғафаров:** Бик оригиналь хәбәр! Гәрәбстанда сүллектә ҡар яуғас, кешеләр ҡарҙан Ҡыш бабай эшләй башлағандар. Әммә улары был шөғөлдән хөкүмәт ҡәтғи тыйған - унда бит дин көслө. Ә беҙҙә Яңы йыл байрамы алдынан премия бирәләр, шул аҡсаға иҫәреп алып, Ҡыш бабай һыны тирәләй бейеп-йырлайҙар. Улар ышаналар инде Ҡыш бабайға...

**Зөфәр Вәлит:** Эй , Әхмәр дуҫҡайым! Мин дә кисә һинең турала ошо уҡ һүҙҙәрҙе ишетеп шаҡ ҡаттым! Ну, нисауа, беҙ ундай ғына һүҙҙәргә бирешә торғандарҙан түгел, шулай бит?

**Рәис Ҡангилдин:** Оооооой, Әхмәр олатай, ҡурҡыттың. Йөрәк жыу итеп ҡалды, уҡый башлағандан алып күҙ маңлайға менгәйне...

**Шәһит Хәмитов:** Олатай, кешеләрҙең йөрәген улай тетрәндермәгеҙ!

**Мотал Рәмов:** Бына һиңә - мә! Ҡотто алдың бит, Әхмәр дуҫ... Яҙғандарыңдың аҙағына барып еткәнсе, әллә нәмәләр уйлап бөттөм... Ә дөрөҫөн әйткәндә, мин Ҡыш бабайға әле булһа ышанам һәм хөрмәт менән ҡарайым...

**Азамат Юлдашбаев:** Алдайҙар! Ышанам... Сөнки... Тсссс... Кешегә әндәшә күрмә... Мин үҙем Ҡыш бабай...

**Хәбир Уразбаев:** Класташ Әхмәр, һин мине ныҡ ҡурҡыттың бит. Ә былай мин Ҡыш бабайға ышанып та ҡуям. Ни өсөн тиһәң, беҙҙең бала саҡ, Әхмәр дуҫҡай, хәҙерге заман һымаҡ булманы бит. Үҙең дә иҫләйһеңдер, моғайын, мәктәптә Ҡыш бабайҙың күстәнәсен өләшә торғайнылар. Кәнфиттәре шул тиклем тәмле булғас, Ҡыш бабай ҙа ысын булғандыр ул ваҡытта, тием...

**Ростәм Нуриев:** Уф, йөрәк ҡайҙалыр аҫҡа төшөп китте. Улай уҡ тупаҫ шаяртма... Һуңына тиклем саҡ уҡып бөттөм... Баштарым әйләнеп китте. Эйе, бар ундай көмөлегем... Тамаҙайым. Ҡыш бабайға ғына түгел, мин бер нәмәгә лә, бер кемгә лә ышанмайым. Хатта үҙ-үҙемә лә төшкә тиклем генә ышанам. Сөнки һәр кемдең үҙ дөрөҫлөгө. Минең дөрөҫлөк - һинеке менән, һинеке башҡаныҡы менән бик һыш тап килмәй. Шулай булғас, нинә яһалма булып ҡыланырға? Ышанмайым, бөттө китте. Әгәр һин ышанаһың икән, бының өсөн һине мин битәрләй алмайым. Ул һинең эшең. Дуҫ булараҡ, һин нисек барһың, шулай ҡабул итәм. Башҡаса мине дуҫ тип иҫәпләй алмаһаң да, мин һине дуҫтар исемлегенән төшөрөп ҡалдыра алмам.

**Мәликә Ҡускилдина:** Ууүй, Әхмәр ағай, һеҙ генә ишетмәһәгеҙ ярай ине, тип йөрөй инем, барыбер алып барып еткергәндәр икән.

**Фәиз Харрасов:** Ә һин шуны әйткән кешегә ышанғанһың икән... Артабан, Әхмәр ағай, һинең үҙеңә нисек ышанырға?

*Икенсе хат:*

*"Белһәң ине күңелемдә ниндәй бурандар уйнағанын. Башҡаса өндәшмәй йөрөй алмайым. Сөнки һине ныҡ яратам, һинән башҡа тормошомдо күҙ алдына ла килтермәйем, күптән инде йәшәүемдең мәғәнәһенә әүерелгәнһең... Һин миңә Хоҙай тарафынан Яңы йыл бүләге итеп ебәрелгәнһең..." Ҡуян ошо һүҙҙәрҙе әйткән дә, кишерҙе мыртылдатып ашап та ҡуйған. Яңы йыл менән!"*

**Миләүшә Ҡаһарманова:** Барыбер рәхәт булып китте...

**Миләүшә Көсәпова.** Шуть үлмәнем...

**Рәзинә Бикташева:** Ҡыуанып киткәйнем, облом булды.

**Фәйрүзә Мөхәмәтшина:** Ҡуяныңды йәлләп, рәхәтләнеп, ярты сәғәт көлдөм дә ҡуйҙым!

**Таңһылыу Янышева:** Һин минең йөҙөмдө күрһәң ине! Ауыҙым асылды, күҙҙәрем аҡайҙы, неужели ағайымды юғалттым икән, тип ҡурҡтым...

**Регина Камалова:** Күңелемдә бурандар уйнаттығыҙ ҙа, шап итеп битемә ҡар бәрҙегеҙ...

**Фәрзәнә Аҡбулатова:** Дуҫым! Ризығың тәмле булһын! Минең дә, ниһәйәт, аппетит асылды! Үҙемдә бүре һымаҡ хис итәм. Күңелем һарыҡ теләй. Эргә-тирәндә күренмәйме һарыҡбаштар? Кишерең менән ҡайнар ҡотлайым, икенсе йыл түтәлеңдә ҡарашырмын! Байрам менән, дуҫҡай!

**Светлана Сөләймәнова:** Мин дә һеҙҙе һөтлө сәйемде яратҡан кеүек яратам!

**Әлимә Гәләмова:** Теге Ҡыш бабайға ышанмау тураһындағы хатығыҙҙы бер апайға ебәргәйнем, ҡан баҫымым күтәрелде, тип ҡурҡытты...

**Зөһрә Түләбаева:** Әхмәр ағай! Йөрәгемә сердце яһайһығыҙ инде! Теге ваҡытта ла ҡурҡытҡайнығыҙ. Уҡый башланым да, көйөп, хәҙер әрләп яҙып ебәрәм, тип әҙерләнә генә башлағайным...

**Фирүзә Абдулллина:** Мин дә һине бииик яратам! Үҙеңде лә, ҡатыныңды ла, ҡыҙыңды ла, ижадыңды ла! Яңы йыл менән, дуҫым!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дуҫтарымдың юғарыла килтерелгән яуаптарынан сығып, шундай һығымталар яһарға була:**

**- Барыһы ла тиерлек иң тәүҙә үҙҙәренең гонаһын һәм Аллаһты иҫкә төшөрҙө - уларҙың һәр ҡайһыһының аң төбөндә Аллаһы Тәғәлә икән дә!**

**- Беҙ йыл һайын Башҡорт ҡыш бабайын эҙләйбеҙ, бәҡтиһән, ул арабыҙҙа йөрөгән Азамат Юлдашбаев һәм уға барыһы ла ышана икән!**

**- Ҡайһы бер дуҫтарым ныҡ асыуланып, мине социаль селтәрҙә "дуҫтар" исемлегенән алып ташлауға тиклем барып етте. Былар барыһы ла Яңы йыл шаяртыуы ғына булды, дуҫтарым, зинһар өсөн улай итмәгеҙ!**

**- Интернет ул виртуаль донъя, унда бер нәмә лә ысын түгел, шуға күрә бындай һөйләшеү булманы, тип иҫәпләгеҙ!**

**Яңы йыл менән!**

**Һеҙҙе яратып,**
**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТЕАТРҘАРҒА ЙӨРӨЙӨК



**А. Володиндың киң билдәле "Өлкән апай" спектаклендәге геройына эйәреп: "Театр! Мин яратҡан кеүек театрҙы яратаһығыҙмы?" тиер инем мин дә бөгөн уҡыусыларға. Минең өсөн театр, бер яҡтан, тормош мәғәнәһе тураһында уйланыу урыны булһа, икенсе яҡтан, был изге йортта кешеләр юғары сәнғәт, юғары зауыҡ менән осраша. Тап театр аша йәмғиәт үҙен борсоған мәсьәләләрҙе күтәреп сыға.**

Үкенес, әммә бөгөнгө театр тураһында һүҙ алып барғанда уның касса йыйыуҙы тәүге урынға ҡуйыуы һиҙелеп тора. Шуға ла репертуарҙа ошондай уҡ маҡсат менән эшләнгән спектаклдәр ҙә урын ала. Дәүләттең уны аҡса эшләү ойошмаһына тиңләүендә театрҙың ғәйебе юҡ, әлбиттә. Тик ижади уныш кассаға күпме аҡса инеү күрһәткесе менән генә билдәләнмәй шул.

Театр юғары төшөнсәләр менән эш итергә тейеш һәм беҙҙең милли театрҙар ҙа ошоға тоғро булырға ынтыла. Мәҫәлән, быйылғы миҙгелдә мине ике әйбер ҡыуандырҙы - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрындағы "Антигона" менән М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрындағы "Калигула". Беҙҙең тамашасы өсөн түгел ул әйберҙәр, тиер кемдер. Дөрөҫөрәге, уны һәр тамашасы аңлай алмай, әммә аңларға тырышырға тейеш. Әгәр ҙә башҡорт театры ниндәйҙер локаль, көнкүреш темаларында ғына сикләнеп ҡала икән, күпмелер ваҡыттан һуң һәр кемебеҙ: "Мин ҡасан һәм ни өсөн фекерләй ҙә белмәгән бер төҫһеҙ кешегә әйләндем?" - тип уйлаясаҡ ирекһеҙҙән. Театр тормошҡа тәьҫир итә алһын өсөн ул көндәлек тормоштан көслөрәк булырға тейеш, тигән бит Кафка ла.

Юғары әхлаҡи ҡиммәттәр өсөн хатта үҙенең ғүмерен ҡорбан итергә әҙер кешеләргә айырыуса мохтаж заманалар була. Жан Ануйҙың Антигонаһы ла бөгөн кәрәк, ни өсөн икәнен аңлатып та тормайым, үҙегеҙ барып ҡарағыҙ. Камюҙың "Калигула"һында ла кешене юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә абсолют хакимлыҡ темаһы үҙәк урында. Хатта уның дөрөҫ булмаған ҡылыҡтарына ҡаршы сығып, "Туҡтатығыҙ мине", тип асыҡтан-асыҡ ҡысҡырыусы ла табылмай, бары тик унан ҡурҡалар ғына. Нимә уны былдай яуызға әйләндерә, ысынында, ул - яуызмы, тигән һорауҙар спектаклде ҡарағандан һуң тағы ла бер нисә көн башта әйләнә әле.

Сәхнәгә күптән сыҡһа ла, яңыраҡ ҡына ҡарау мөмкинлеге эләккән "Йософ һәм Зөләйха" спектакленән шундай ҡәнәғәтлек алып ҡайтҡайным, хәҙер ошо уҡ Башҡорт дәүләт академия драма театрында Илшат Йомағоловтоң мәшһүр "Нәркәс" трагедияһын тергеҙәләр икәнен ишетеп, ошо спектаклде көтөп йөрөйөм. Кемдәр Нәркәсте уйнар, Тимерхан ролендә кем булыр - былар барыһы ла ҡыҙыҡ миңә, театр һөйөүсе ябай тамашасыға. Әйҙәгеҙ, бергәләп йөрөйөк театрҙарыбыҙға, хөрмәтле милләттәштәр!

**Миңлегөл ҠАНСУРИНА,**
**БДУ доценты.**

# ...ҮҘ БЕЙЕҮҘӘРЕБЕҘҘЕ БЕЙЕЙЕК!




**Һәр профессиональ сәнғәттең нигеҙендә үҙешмәкәр сәнғәт ята - мин быға үҙ тәжрибәмдә күптән инанғанмын. "Байыҡ" телепроекты ошоноң аныҡ миҫалы. Халыҡ араһында бейеүселәр күп, әммә уларҙы берләштереүсе юҡ ине, хәҙерге көндә "Байыҡ" тапшырыуы ошо яуаплы вазифаны башҡара, тип әйтһәм, моғайын, яңылышмам.**

"Байыҡ" көйө миңә бала саҡтан таныш, сөнки беҙҙең яҡтарҙа йырламаған, бейемәгән кеше юҡ. Шуға ла телевидениела "Байыҡ" башҡорт бейеүен башҡарыусылар конкурсы ойоштороу идеяһы барлыҡҡа килде. Баймаҡта интернатта уҡып йөрөгән саҡта районда "Байыҡ" конкурсы үткәйне, уны Әкрәм Әгзәм улы Ниғмәтуллин ойоштороғайны. Ошо тамашаны, унда ҡатнашҡан Мөхәмәт ағай Иҙрисовты, башҡорт бейеүен еренә еткереп, халыҡсан итеп башҡарыусыларҙы күреп, ныҡ хисләнеп, күңелдә осҡондар ҡабыҙып ҡайтҡайным. Ошо проектты башлаған ғына осорҙа күптәр, килеп сыҡмай ул, тип тә фаразлағайны. Шуға ҡарамаҫтан, тамашасы хөкөменә хәҙер инде "Байыҡ"тың туғыҙынсы Гала-концертын тәҡдим иттек. Минең күңелемдә ҡасан да булһа, башҡорт бейеүен бейей белеүселәр бөтөп ҡуйыр, тигән ҡурҡыу ҙа юҡ. Республика етәкселәренә рәхмәтлемен, "Байыҡ" кеүек халыҡ талантын сағылдырған бәйге-фестивалдәрҙең үҙе үк сәйәсәт икәнен, уны үҫтереү шулай уҡ тәрбиәүи, идеологик эш икәнен аңлап, дәүләт кимәлендә ярҙам күрһәтелә. Һәр дәүләт үҙ үҫешендә барыбер үткәндәргә таяна. Ә ерле халыҡтың, ошондағы милләттәрҙең мәҙәниәтен үҫтермәй икән, ул бер ҡасан да алға бара алмаясаҡ, сөнки йыр ҙа, бейеү ҙә тарих менән бәйле. Ә "Байыҡ" халыҡта бейеү һулышын яңынан асты.

Быйылғы "Байыҡ" бәйгеһендә лә республика райондары-ҡалаларынан тыш, Рәсәйҙең Силәбе өлкәһенән бейеүселәр ҡатнашты. Бөтәһе ун бер Гран-при тапшырылды. Был осҡа бейеүселәрҙең сығышын Яңы йыл каникулдарында телевизорҙан күрә аласаҡтар. Милләттәштәребеҙ өсөн бергәләп ҡыуанайыҡ, дуҫтар. Башҡорт бейеүенең дөрөҫ үҫеше, үҙенде милләт булараҡ данлау һәм республикала бына ошондай талантлы халыҡ йәшәй, тигән статусыңды күрһәтеү өсөн "Байыҡ" беҙгә бик кәрәк. Барлыҡ гәзит уҡыусыларҙы Яңы йыл менән ҡотлайым. Үҙебеҙҙең бейеүҙәрҙе бейеп, йырҙарыбыҙҙы йырлап йәшәйек!

**Рита ӨМӨТБАЕВА,**
**"Башҡорт йыры", "Байыҡ" телевизион проекттар авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.**

✓ Бөтөн йондоҙлоҡ билдәләренән дә әүҙемләшеү, һөнәр оҫталығын, белемен арттырыу талап ителәсәк, шунһыҙ, "ем сүпләй" алмай ҡалыуығыҙ бар: Әтәс йылы, иҫкәртеүебеҙсә, ауырлыҡтар, аҡсаға ҡытлыҡ килтерер.



ИНТЕРНЕТТАН



# АУЫРЫУҘАН... витамин һаҡлаймы?

■ Һалҡын тейҙереп йышыраҡ ауырыған мәлдәрҙә С витамины ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Аскорбин кислотаһы булараҡ билдәле был витамин кеше организмында барған биохимик процестарҙа мөһим роль уйнай. Ул ирекле радикалдарҙы нейтралләштерә, шулай уҡ иммун процестарында ҡатнаша. С витамины ҡайһы бер иммун күҙәнәктәренә тәьҫир итә, был иһә һалҡын тейҙереп йышыраҡ ауырыған миҙгелдәрҙә бигерәк кәрәк. Шулай ҙа витамин ҡабул итеү ауырыуҙан һаҡлай алмай. Һауа торошона ҡарап кейенеү, яҡшы туҡланыу, шыйыҡлыҡтарҙы күберәк эсеү ауырыуҙан һаҡлай. Ауырып китһәгеҙ, уны аяҡ өҫтө йөрөп үткәрмәгеҙ.

■ Калифорния ғалимдары әйтеүенсә, балаларға уйынсыҡ һатып алғанда малайҙарға - машина, ҡыҙҙарға - ҡурсаҡ, тигән ҡараштан баш тартырға кәрәк. Бала төрлө уйынсыҡ менән уйнарға тейеш. был уның гармоник шәхес булып үҫешеүенә ярҙам итә. Ғалимдар фекеренсә, уйынсыҡтарҙы енестәргә бүлеү һөҙөмтәһендә ир-ат башлыса математика, фән һәм технологиялар менән бәйле һөнәрҙәр һайлай, ә ҡатын-ҡыҙҙар ғүмерен балалар тәрбиәләүгә, уҡытыусы, тәрбиәсе кеүек һөнәрҙәргә бағышлай. Сөнки ниндәйҙер фәнгә ҡағылышлы уйынсыҡтарҙы малайҙарға алалар, ә ҡыҙҙарҙың уйынсыҡтары баланың вербаль һәләттәрен күберәк үҫтерә. Йәғни, баланың ҡайһы бер һәләттәре теге йәки был уйынсығы булмау һөҙөмтәһендә үҫешмәй ҡала. Етмәһә, йәмғиәттә малайҙар математиканы яҡшыраҡ белә тигән ҡараш йәшәй. Был да гүзәл затҡа һөнәр һайлауҙа ҡамасаулыҡ итә. Шуға ла ата-әсәләр балаға төрлө уйынсыҡтар уйнарға мөмкинлек бирергә тейеш.

■ Аҡ май файҙалымы, юҡмы, тигәнерәк бәхәстәр белгестәр араһында күптән бара. Мәҫәлән, Тафтс университеты үткәргән һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, диабет хәүефен түбәнәйтеү өсөн көнөнә бер ҡалаҡ май ашарға кәрәк. Гарвард университеты ғалимдары аҡ май ашауҙан тыйылырға кәңәш итә, ул йөрәк сирҙәрен барлыҡҡа килтерә, ти. Берген университеты, киреһенсә, организм өсөн май кәрәк, тип белдерә, ул "файҙалы холестерин" кимәлен күтәрә икән. Тикшеренеүселәр 38 ир-егетте тикшереп, майлы диета тотоусыларҙың "файҙалы холестерин" кимәле күтәрелеүен раҫлаған. Май ашауҙан бил тирәһенә йыйылған майҙар юҡҡа сыҡҡан, бауыр, йөрәк майҙан ҡотолған, ҡандағы инсулин һәм шәкәр күрһәткесе яҡшырған, дөйөм алғанда, май ашау файҙаға ғына булған.

■ Хәҙерге балалар урамда һирәк уйнай, тәбиғи яҡтылыҡ етешмәү күреү һәләтенә насар йоғонто яһай. Лондондың гигиена һәм тропик медицина мәктәбе раҫлауынса, В-спектрының УФ-нурҙары тәьҫире миопия үҫешен түбәнәйтә. Бигерәк тә бала һәм үҫмер саҡта ҡояшта йыш булырға кәрәк, шул саҡта өлкәнәйгәс тә күреү һәләтен һаҡлап ҡалып була. Шулай уҡ 14-19 һәм 20-39 йәштә УФ-нурҙарҙы күберәк алыу күреү һәләтенә яҡшы йоғонто яһаған. Ә бына D витамины ҡабул итеүҙең бер файҙалы яғы ла асыҡланмаған.

ЙОНДОҘҘАР НИМӘГӘ ИШАРАЛАЙ?

# ҠАНАТЛЫЛАР ҺӘМ ӘҮҘЕМДӘР...

## маҡсаттарына өлгәшер

**Көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса, 2017 йыл менән Ҡыҙыл, өҫтәүенә, Ут Әтәс идара итәсәк. Ә был ҡошто беҙ, йорт мәхлүге булыуына ҡарамаҫтан, уҫал, тиҙ ҡабынып, осоп-ҡуныусан, һуғышсан тип беләбеҙ. Улай уҡ ҡурҡып та китмәгеҙ әле: шул уҡ ваҡытта әтәс, ваҡсылыраҡ булһа ла, йыйнаҡ, йүнсел һәм хатта йомарт тип тә ҡылыҡһырлана. Ул, ғәҙәттә, үҙ юлындағы ҡаршылыҡтарҙы яратмай, ә бына йорт, ғаилә ҡиммәттәрен бик юғары баһалай. Шуға күрә лә Ут Әтәс йылын өйөңдә, ғаиләң янында ҡаршылау хәйерлерәк.**



Йондоҙнамә күҙаллауынса, 2017 йылда Ер шары үҙгәрештәр ҡойононда әйләнер. Дәүләттәр араһында донъя хакимлығы өсөн көрәш темаһы яңылыҡтарҙың иң уртаһында буласаҡ. Әтәс йылы тыныс, һәүетемсә генә бармаҫтыр, ахыры. Һәр хәлдә, йылдың тәүге яртыһында ҡыйынлыҡтар булып алыр, сөнки күптәр илдәге тотороҡһоҙ иҡтисади-финанс шарттарына яраҡлашыу саралары эҙләр, яңы йүнәлештәр билдәләр. Бөтөн йондоҙлоҡ билдәләренән дә әүҙемләшеү, һөнәр оҫталығын, белемен арттырыу талап ителәсәк, шунһыҙ, "ем сүпләй" алмай ҡалыуығыҙ бар: Әтәс йылы, иҫкәртеүебеҙсә, ауырлыҡтар, аҡсаға ҡытлыҡ килтерер. Кемгәлер үҙ эшмәкәрлеген алыштырырға, кемгәлер яңы һөнәр үҙләштерергә тура килер. Иҫке ғәҙәттәренә йәбешеп ятмайынса, эҙләнеүсән, заман менән бергә атлағандарға уңыш юлдаш булыр һәм улар үҙҙәренең финанс хәлен яҡшыртыуға өлгәшер. Шул сүрәттә лә 2017 йыл аҡсаны һаҡсыл тотоноу талап итеүә, бурысҡа биреп торорға ашыҡмағыҙ: ҡайтарып ала алмауығыҙ бар. Һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләренә, киҫкен респиратор ауырыуҙарҙы, хроник сирҙәрҙең ҡуҙғыуын иҫкәртеү сараларына нык иғтибар бирегеҙ. Әлеге әйтелгәнсә, һәр йәһәттән әүҙем, үҙҙәрен ыңғайға көйләй белгән, үҙгәрештәрҙән ҡурҡмағандар өсөн йыл ярайһы уңышлы бу-

ӘЙҘӘГЕҘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# ИРТӘ ТОРҺАҢ...

**Бөгөн мин кисәгегә ҡарағанда нығыраҡ, сыҙамлыраҡ, көслөрәк, сөнки тәнемә физик көсөргәнеш бирәм, файҙалы ризыҡ менән туҡланам, витаминдар ҡулланам. Шулай уҡ мейене лә эшкә егәм, уны ла бер аҙ көсәндереп алам һәм ял иттерәм - китап уҡыйым, медитация яһайым. Былар барыһы бергә миңә бер бөтөн һәм ҡеүәтле механизм кеүек эшләү мөмкинлеге бирә. Һәм һәр көн өсөн мөһим элемент - ул рәхмәтле була белеү.**



Әгәр мин хәрәкәт итмәһәм, артабан үҫешмәйәсәкмен. Шуға күрә ябай ғына формула эшләп, көн дә шул алгоритм буйынса йәшәргә кәрәк: аҡыл йәһәтенән үҫеш - китаптар уҡы, рухи яҡтан үҫеш - күңеленә яҡын өлкәне үҙең һайла: доғалар уҡыйһыңмы, медитацияға инәһеңме һ.б. Физик яҡтан үҫешкең килһә инде - бында ла һайлау хоҡуғың бар: йүгерәһеңме, кросфитмы, спорт залына бараһыңмы, фитнесҡа яҙылаһыңмы йәки ихаталағы спорт ҡулайламаларында шөғөлләнәһеңме... Әммә бында аҡыл һәм рухи йәһәттән үҫештән бер генә айырма бар - ҡайҙа күнекмәләр эшләүең мөһим түгел, ә кем менән шөғөлләнеү мөһим. Төркөм динамикаһы һәр саҡ эшләй.

Ә инде көндө нисек башлайһың, ул шулай дауам итә. Был хаҡта барыбыҙ ҙа белә, әммә уны бик һирәктәр генә үтәй. Минең иртәнге ритуалдарым шунан ғибәрәт: таңғы сәғәт биштә йоҡонан торам. Бал йәки лимон һалынған бер стакан һыуыҡ һыу эскәндән һуң, тәнемде йомшартыу күнекмәләре эшләйем. Артабан йоганан тын алыу күнекмәләрен башҡарам. Тын ала белергә лә кәрәк: шатлыҡ менән тын алығыҙ, изгелек менән сығарығыҙ, күнегеүҙе һәм йөрәгегеҙҙе мөхәббәт менән тултырығыҙ.

Шунан инде иң яратҡан шөғөлөмдө - 30-40 минутлыҡ медитацияны башлайым. Ул минең тормошома бик оҙаҡ килеп инде, әммә хәҙер инде һәр иртәмдең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнде. Бынан тыш, аффирмацяларҙы ҡабатлау ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Минең һәр көнөм "бөгөн минең иң яҡшы көнөм, мине бөйөк эштәр көтә, был көндө мин мөхәббәткә, шатлыҡҡа төрөнөп һәм ошо һөйөү-ҡыуанысты башҡалар менән дә бүлешеп үткәрәм", тигән көйләнештә үтә

Шулай уҡ дуҫтарым һәм фекерҙәштәрем менән һәр шәмбе иртәнге 9-ҙа баш ҡаланың Якутов исемендәге паркындағы Һалдат күлендә һыу инәбеҙ, сөнки һыуыҡ энергияһы кешене дәртләндерә, көс бирә. Һуңынан инде 12-се яртыла кроссфит буйынса күнекмәләр эшләйбеҙ.

Иң мөһиме - көндәлек мәшәҡәттәр, ығы-зығы араһында аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла мәсеткә барырға онотмағыҙ. Юҡҡа ғына, бер көнөңдө Аллаһы Тәғәләгә бир, тимәйҙәр. Уға табан бер аҙым яһаһағыҙ, ул һеҙгә табан ун аҙым яһай!

**Дим ДӘҮЛӘТОВ.**

лыр, тип юрай йондоҙҙар. Унан, уйынлы-ысынлы әйткәндә, Әтәс йорт хайуандары йылдарында тыуған кешеләргә ҡарата мәрхәмәтле булыр, тигән ышаныу бар: Йылҡы, Үгеҙ, Ҡуй (Кәзә), Эт, Суска, Ҡуян (Кролик), Әтәс 2017-лә борсолоуҙарһыҙ, тыныс йәшәй ала - йыл хужаһы ихаталаштарын йәберләргә бирмәйәсәк. Башҡа ҡайһы бер хайуандар ҙа, йыртҡыс һәм дә ҡырағай булған хәлдә лә, Әтәстең ихтирамын ҡаҙанасаҡ, тиҙәр. Юлбарыҫҡа, мәҫәлән, ҡыйыу , батыр булғаны, Аждаһаға - матур ҡанаттары һәм йомартлығы, Сысҡанға - ярактлаша белгәне, Йыланға фәҡәт йылан булғаны өсөн хөрмәт күрһәтелер. Хатта тиктормаҫ Маймылға ла, сөнки уныһы Әтәскә ҡәнәфи бушатҡан арала бер-ике көлөмәс һөйләп, 2017 йыл хужаһының күңелен күрергә лә өлгөргән, уәт, ҡылансыҡ! Ҡыҫҡаһы, юҡтан ғына ла шатлыҡ табып, үҙ күңелен күреп, уйҙарын ынғайға көйләй белгәндәргә йыл да ыңғай, матур килер, ә Әтәс тырышлыҡты баһалай белә ул!

**Эт** йылында тыуғандарҙы ҡыҙыҡлы тормош көтә. Был йылда тыуғандар намыҫлы һәм ышаныслы кешеләр. Был сифаттары уларға эштәрендә ныҡ ярҙам итә лә инде. Уны икеләнеп тә тормайынса теләһә ҡайҙа эшкә алаҫаҡтар, ләкин 2017 йылда икенсе эшкә күсергә теләүселәр булһа, уларға ныҡ ҡына уйланырға кәрәк. Яңы урын ылыҡтыра, әлбиттә, ләкин хеҙмәт итеп өйрәнелгән, күнеккән урынды, туған коллективыңды, мыжыҡ, талапсан булһа ла, ваҡыты менән ҡәҙимге кешегә оҡшаған етәксеңде лә ташлап китеүе йәл буласаҡ.

**Әтәстәргә** үҙ йылында урҙаларына ҡунаҡлап, йырлап ҡына ултырырға форсат тыуа. Әтәс үҙ туғандарын хәстәрлек менән солғаясаҡ. Һөнәри өлкәлә Әтәстәр ни теләһә, шуны атҡарыр, хатта ки етәксе вазифаға ла өлгәшеүҙәре ихтимал.

**Ҡабандарға** матур йыл килә, улар бәхетле буласаҡ. Ҡабан донъяны нисек бар - шулай ҡабул итә. Әтәскә бындай ҡараш оҡшай, шуға ла ул Сускаларға маҡсаттарына өлгәшеү юлында һәр саҡ ярҙамға килеп етәсәк.

**Йылҡыларға** ла 2017 йыл бәхетле булмаҡсы. Белеүебеҙсә, улар бик хеҙмәт һөйөүсән - ат шикелле эшләйҙәр. Намыҫлы хеҙмәт үҙ баһаһына лайыҡ буласаҡ, ниһайәт. Эш биреүсе Йылҡыларға яңы вазифа, юғары эш хаҡы тәкдим итер. Һәм, ғөмүмән, Әтәс йылында Йылҡылар үҙҙәрен ауыл хужалығында ла, сауҙа өлкәһендә лә уңышлы һынап ҡарай һәм аҡса эшләй ала. Улар шулай уҡ ижади өлкәлә лә юғалып ҡалмаясаҡ.

**Йыландарҙы** ла байтаҡ ҡына ҡыҙыҡлы эштәр көтә. Тыныс һәм ҡуҙғып бармаған, ләкин кәрәк булғанда ыҫылдап, ағыулы тешен күрһәтеп алыусы йыландарҙы Әтәс былай ҙа бик ярата һәм ихтирам итә. Белмәгән кешегә йыландар ялҡау һымаҡ күренәләр, тик бының серен йондоҙҙар ғына белә: яңы һикереш алдынан хәл туплай улар. 2017 йыл күп Йыландар өсөн һөнәри уңыштар һәм табыштар алып килмәксе. Иң мөһиме - уйлап эш итеү, белем кимәлегеҙҙе камиллаштырыу, тағы ла - эске һиҙгерлек. Ә бынынһы инде һеҙгә тыумыштан хас сифат.

**Ҡуй** малы һәм кәзәләр йыл менән ҡәнәғәт булһын өсөн йомарт Әтәс бөтәһен дә эшләйәсәк. Дөрөҫ, уйнарға бик яратһалар ҙа, кәзә-һарыҡ төп ролдә башҡарырға яратмай, шулай ҙа Әтәс йылы уларға иғтибар үҙәгендә булырға тура киләсәк - матур фекерҙәре, ҡыҙыҡлы проекттары арҡаһында. Һәм, ғөмүмән, эштәре майлаған кеүек барасаҡ Ҡуйҙарҙың. Ә бына етәкселек хаҡында хыял иткәндәре урынбаҫар ролендә лә юғалып ҡалмаҫ, сөнки эште планлаштырыу оҫталығында уға тиңдәр юҡ. Әтәс үҙе йыш ҡына һеҙҙән кәңәш һораясаҡ әле!

**Маймылдар** йыл буйына ҡайғыхәсрәтһеҙ генә ботаҡтан-ботаҡҡа һикерәндәп ваҡыт уҙғарған икән, йыл хужаһы алышынғас та ошо ғәҙәттәрен ташламаясаҡ - шундай тиктормаҫ, шуҡ булып тыуған да улар. Әтәс уларҙан талап итәсәк бер генә нәмә - ул да булһа, Маймылдарҙың үҙ тормоштарын бер аҙ планлаштырып ҡарарға өйрәнеүе. Югинә, был билдә эйәләренең ниәттәре минут һайын үҙгәреп тороусан: бөгөн улар етәксе урынында үҙҙәрен бик уңайлы тойһа, иртәгә экспедиция менән Төньяҡ ҡотопка сығып китмәҫ, тимә. Хәйер, ни менән генә шөғөлләнмәһен, уларға һәр саҡ йәшел ут юлдаш буласаҡ.

**Үгеҙ** йылы тыуғандар өсөн йондоҙҙар ҙа хатта шат: 2017 йылда Әтәс бит уларҙы үҙ ҡанаты аҫтына аласаҡ! Ныҡышмал Үгеҙҙәр әкренләп булһа ла ышанысл рәүештә карьера баҫҡысынан күтәреләсәк. Түрә ролендә уларҙың иң яҡшы сифаттары асыласаҡ - ҡул аҫтындағылары бик ҡәнәғәт булырҙар. Үгеҙҙәр, һис һүҙһеҙ, власть ярата, шул уҡ ваҡытта уның шарттарын теүәл үтәй, йолаларын һаҡлай. Ҡыҫҡаһы, бизнеста һәм ижади өлкәлә ниндәй генә яңылыҡтар уйлап сығарһағыҙ ҙа, һеҙҙең идеяларға бер кем дә ҡаршы төшмәҫ.

**Аждаһалар** менән йыл буйына Ҡыҙыл Ут Әтәс ярышлап осасаҡ һәм һәр ваҡыт уларға ярҙамға килергә әҙер булыр. Ысынлап та, һөнәрҙәре өлкәһендә ҡанатлы был йән эйәләренә тиңдәш табылмаҫ. Ни тиһәң дә, юғарынан күберәк күрәнә шул. Аждаһа, һәр ваҡыттағыса, камиллыҡҡа ынтылыр һәм Әтәс фатихаһы менән ҡайҙа эшләй, шул өлкәлә ҡаҙаныштарға өлгәшер. Аждаһа хатта ял көндәрендә лә эшһеҙ ултырмаясаҡ, шул арҡала юғары вазифалар яуласаҡ.

**Ҡуян** йылы тыуғандаға бер аҙ иркен һулап алырға ла форсат тыуа. Әтәс үҙ йылында һеҙҙе бәхетле итәсәк. Ҡуяндар бөхтәлек ярата - эш урынығыҙ тап һеҙҙең талапҡа яуап бирә лә инде. Һеҙҙең тыныслыҡты һаҡлап, яңығыҙҙағылар аяҡ остарында ғына йөрөйәсәк. Ҡуяндар үҙгәрештәрҙе өнәп бөтмәһә лә, эш алыштырыу мөмкинлегенән ҡәнәғәт ҡаласаҡ, сөнки итәғәтле Ҡуяндарҙы хеҙмәттәштәре лә, конкуренттары ла ихтирам итә.

**Юлбарыҫтар** - ҡыҙыу ҡанлы, ярһыу халыҡ, әйтергә лә түгел. Әтәс үҙ хакимлығындағы был ғорур йән эйәләренә битараф ҡалмаясаҡ. Улар һәр саҡ маҡсаттарына ынтыла. Ҡайҙа хәүеф - шунда мотлаҡ был "егеттәр" булыр. Мажараһыҙ бер көн дә йәшәй алмайҙар. Әтәс уларға енеүгә ынтылыштарында бөтөн уңайлы шарттар тыуҙырасаҡ. Эш урындарында ла Юлбарыҫтарҙы фәҡәт ҡаҙаныштар ғына көтә, тик нимә теләүегеҙҙе алдан ныҡлап уйлағыҙ.

Был йылда әүҙем **Сысҡандар** уңышҡа өлгәшер һәм, ғөмүмән, улар ни теләһә - шул алдарына килер. Әтәс фәҡәт әүҙемдәргә ярҙам итәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әҙерләне.**

## УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Юмор хисе ҙур әһәмиәткә эйә. Ул һаҡлаусы клапан кеүек, үҙ-үҙеңә саманан тыш етди ҡарамаҫҡа мәжбүр итә. Күпселек тормошто артыҡ етди ҡабул итә. Хатта дин дә артыҡ етди. Күңел, кәйеф күтәрә, яҡтылыҡ һәм дәрт сығанағы булырға тейеш хис-тойғолар һәм тәьҫораттар бары тик гәйеп һәм депрессия тойғоһо ғына тыуҙыра. Быны шуның менән генә аңлатырға мөмкин: әгәр һеҙ кешене үҙен лайыҡлы түгел йәки кәм итеп тойорға мәжбүр итеүгә өлгәшһәгеҙ, уны контролдә тота алаһығыҙ. Бәйлелек шарттары ла шундай уҡ. Ә Илаһи бөтәләй юмор хисе юҡ тип уйлайһығыҙмы? Дикобразға ҡарағыҙ! Аллаһы Тәғәлә беҙҙе юмор хисе менән бүләкләп, көсөргәнешлекте бөтөрөргә ярҙам итә. Юмор беҙгә үҙ ҡурҡыуыбыҙҙан көлөү мөмкинлеге бирә.

Нимәнән ҡурҡаһығыҙ, шуға ваҡыты-ваҡыты менән баштан-аяҡ сумығыҙ. Тиҙҙән ҡурҡыу ысын йөҙөн - иллюзия ғына булыуын күрһәтер. Был рухи һәм эмоциональ көстө нығытырға ярҙам итә. Күпселек осраҡта ҡурҡыу беҙҙең аҡылды тәнгә ҡарағанда күберәк ҡулланыуыбыҙ менән бәйле. Әгәр йыш уйлап, ғәмәл ҡылмайығыҙ икән, ҡурҡыу тыуҙыраһығыҙ. Әүҙемерәк тормош алып барһағыҙ, ҡурҡыуға һәм тыныҫһыҙланыуға ваҡытығыҙ ҡалмаясаҡ. Оҙайлы араға йәйәү йөрөгөҙ, йәйәү йөрөү мускулдарҙағы көсөргәнеште кәметә. Артыҡ актив аҡыл эшмәкәрлеге һәм пассив тән - бик күп етди проблемаларҙың сәбәбе. Тыныс урын табып, тәнәфес эшләгеҙ һәм үҙегеҙ менән алып килгән китаптың теләһә ниндәй битен асығыҙ. Төпкә аңығыҙ һеҙгә кәрәкле урынды үҙе табыр. Бер йәки ике бит уҡығыҙ ҙа, кирегә юлланығыҙ. Атлаған ыңғайға әле генә уҡығанығыҙҙы уйлаясаҡһығыҙ. Аңығыҙ менән тәнегеҙ идеаль гармонияла эшләйәсәк. Ҡурҡыу гармония булмағанда тыуа. Бындай принцип тәндә камиллаштырыуҙа ла иҫәпкә алына, әммә аңды камиллаштырғанда һәм уларҙың икеһен бер гармониялы бөтөн итеүҙә инҡар ителә.

**Йыһан тәртибен үҙгәртегеҙ.** Һеҙ үҙгәрештәр: тормоштоң матур булыуын, машина урынына автомобиль, торлаҡ урынына йорт теләйһегеҙ. Әммә быларға бары тик ҡурҡыу тиранияһына нөктә ҡуйғанда ғына эйә буласаҡһығыҙ. Үҙгәртеүҙәр фекерләү образының үҙгәреүен, тағы ла булған әйберҙәрҙән, үҙегеҙ теләгән нәмәләрҙе алыу өсөн, баш тартырға әҙерлекте аңлата. Быны һеҙҙең өсөн берәү ҙә эшләмәйәсәк.

**Һеҙ үҙгәргәс, үҙгәрештәр ҙә киләсәк.** Уртаҡуллылыҡтан арыныуға теләһәгеҙ, үҙгәрергә теләүегеҙҙе даими танырға тура киләсәк. Һәр бөйөк шәхес - индивидуаль. Улар кешеләр төркөмөнән айырылып тора. Булған батырлығығыҙҙы йыйып: "Мин һоро тәскә мансылған ғәҙәти тормош менән йәшәргә теләмәйем. Мин башҡа. Мин фантастик киләсәкле фантастик шәхес. Ғәҙәти тормош минең өсөн түгел", - тип әйтегеҙ. Быны хәҙер үк башлағыҙ ҙа, мөмкин булғанса йышыраҡ ҡабатлағыҙ. Әгәр һеҙ йонсоғанһығыҙ һәм ҡурҡҡанһығыҙ икән, сәбәбе мажаралар юҡлыҡталыр, моғайын. Көн һайын бер үк һуҡмаҡтан йөрөүҙән дә насарырағы юҡ. Бер үк карауатта йоҡлауҙан. Бер үк урында ашауҙан. Бер үк кешеләр менән аралашыуҙан. Көн һайын бер үк нәмәне ҡабатлауҙан. Бынан аҡылдан яҙыуың мөмкин. Бер төрлөлөк ижади ҡарашты үлтерә һәм психиатр ишеге төбөнә алып килә. Ошо ҡотолғоһоҙ ҡулсала әйләнеүселәр - хатта саҡ ҡына үҙгәрештәрҙән дә ҡурҡыусы бер төрлөлөк ҡолдары.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

## МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Балалы ҡатын

Был хәлдәрҙе Ғәҙелгәрәй ауылынан Мостафин Салауат Хәләф улы һөйләгәйне. 1952 йылғы ине. Хәҙер мәрхүм инде.

Бер мәл һыбай Нөгөшкә китеп бара инем, мылтығым да бар. Бара торғас, төнгә ҡалдым, шулай ҙа ай ҡалҡҡанға күрә, төн яҡты ине. Ҡара көҙ мәле, ер тун, ат дағаһыҙ булғас, юрта алмай. Етеҙ генә атлатып барам. Ауылға етергә лә күп ҡалманы. Бына бер мәл алдараҡ бер ҡараҫҡы пәйҙә булды. Мин, айыу-мазарҙыр тип, мылтығымды әҙерләп, ҡулда тотоп киләм. Яҡынайғас, уның айыу түгел, ә бала күтәргән бер ҡатын икәнен күрҙем. Ер өҫтә һыуыҡтан шытырлап ята, ә теге ҡатын ҡулдәксән, яланаяҡ килә. Мин шикләнә ҡуйҙым: был мәлдә, был ҡиәфәттә кем йөрөргә мөмкин төнөн менән, яланғас бала күтәреп? Үҙе лә ҡулдәксән генә, өшөмәй микән ни? Баштан бер-бер артлы төрлө уйҙар йүгереп үтте. Ошо тирәлә йыш ҡына бала күтәргән ҡатын осрауынололарҙан ишеткәнем келт итеп иҫкә төштө. Шунан инде бының кем икәненә шигем ҡалманы. Мин ҡурҡа башланым. Ике ара бөтөнләй яҡынайҙы. Мин туҡтаным, ул да туҡтаны. Минең мылтыҡ ҡороулы, ҡулда әҙер генә тора.

- Кит юлдан, юҡһа, атам! - тип, мылтығымды баяғы ҡатынға тоҫҡаным.

- Ай-й-й, атма, баламды үлтерәһең бит! - тип, ялбарып әйтелгән яуап ишеттем. Теге ҡатын туҡтарға, аттан төшөргә ҡуша, ә мин ҡурҡам. Ни булһа ла булыр, тинем дә, атты йән-фарман ҡыуып, эргәһенән сабып үтеп киттем. Артыма әйләнеп ҡараһам, теге бер аҙым ҡалмайынса, арттан килә, үҙе туҡтарға ҡуша. Сабып ауылға барып ингәс кенә ауыл осонда тороп ҡалды теге.

Элек мин бындай хәбәрҙәргә ышанмай, әкиәт ул, тип көлә инем. Үҙем менән шундай хәл булғас, ни тип аңлатырға ла белмәйем".

**Рауил АСЫҒОЛОВ.**
**(Аҙағы).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙОЛАЛАРЫБЫҘҘЫ ҺАНЛАЙЫҠ!

**Бөгөнгө заман көнимешебеҙгә, йолаларыбыҙға ла ҙур үҙгәрештәр индерә. Элекке кеүек, оло өмәләр ойошторop, туғандарҙы, дуҫ-иште, күрше-күләнде бергә туплаған күп йолалар, мәҫәлән, һуғым һуйыу, бура бурау, йорт күтәреү, бесән сабыу кеүек эштәр ҙә әллә ҡайҙа тарихта тороп ҡалғандай. Шулай ҙа арабыҙҙа, башлыса ауылдарыбыҙҙа, йырлы-моңло өмәләрҙе тергеҙгән, йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һанлаған кешеләр булыуы күңелде йыуата. Яңыраҡ ҡына ошондай күңелле саралар Белорет районының Сосновка ауылында үтте: Мусиндар, Мансуровтар, Сафуановтар һәм Кәримовтар ғаиләһе күңелле ҡаҙ өмәләре ойошторҙо.**




Сосновкала башҡорттар менән бергә төрлө милләт вәкилдәре йәшәй. Бындай мөхиттә башҡалар араһында һыр бирмәй, матур сифаттар күрһәтеп, йолаларыңды күтәрмәләп йәшәргә кәрәк икәнен аңлай милләттәштәр. Был йәһәттән бигерәк тә Сосновка ағинәйҙәре ойошмаһы әүҙем эшләй. Әленән-әле төрлө милли байрамдар, файҙалы һәм фәһемле саралар ойоштороп ҡына тора улар. Был юлы ла бергәләп кәңәшләшеп, ауылда ҡаҙ өмәләрен тергеҙеп ебәрҙеләр. Ҡулдарына күстәнәстәр тотоп, урам буйлап йырлап, өмә уҙасаҡ йортҡа юлланған сағыу милли кейемдәрҙәге төркөмдө олоһо ла, кесеһе лә тамаша ҡылып күҙәтте. Ә инде биҙәлгән көйәнтәләргә ҡаҙҙар элеп, йылғаға киткән өмәселәрҙе урамдан уҙған машиналар ҙа туҡтап оҙатып ҡалды.

Ошо хаҡта өмә ойошторған ғаиләләрҙең береһе Земфира һәм Мәүлит Кәримовтар менән әңгәмәләштек.

- Быйыл яҙғыһын ике аҙналыҡ 11 бәпкә һатып алғайныҡ, шуларҙың бөтәһе лә көҙгә тиклем теүәл йөрөнө, - тип һөйләп китте хужабикә. - Ҡайһы берәүҙәр ҡаҙ аҫрауҙың файҙаһынан мәшәҡәте күп тиһәләр ҙә, бер ҙә ыҙалаfamай ғына үҫтерҙек бәпкәләрҙе. Ауылда йылға булмағас, ихата эсенә бәләкәй генә күл эшләп ҡуйҙыҡ. Ашатыу ҙа артыҡ сығымлы булманы. Ҡаҙ өйрәк кеүек күп ашамай, ите лә күберәк, мәшәҡәте лә әҙерәк. Бынан тыш, 11 генә ҡаҙҙан әллә күпме май, мамыҡ алдыҡ. Өмәне 16 ҡаҙ салдырған Лүзә апай Сафуановаларҙа башланыҡ. Артабан Фәймә менән Юныс Мансуровтарҙа - 23, Фәнилә менән Динислам Мусиндарҙа 21 ҡаҙ йолҡтоҡ.

Үҙебеҙҙә өмә булаһы көндө иртә менән йырҙар йырлап, матур теләктәр теләп өмәселәребеҙҙе ҡаршы алғас, бергәләп сәй эстек тә, эшкә тотондоҡ. Төп өмәсебеҙ, үҙе лә ғүмер буйы күпләп ҡош-ҡорт үҫтергән Фәнилә апай Мусина ҡаҙ йолҡоуҙың бөтә нескәлектәрен, серҙәрен өйрәтте. Уның әйтеүе буйынса, иң тәүҙә ҡанат аҫтындағы хәрәм ҡаурыйҙарҙы йолҡоп алып ситкә ташланыҡ. Быйыл салынған ҡаҙҙарҙы элеккесә үтекләп торманыҡ, бер-ике минутҡа ҡайнар һыуға тығып алып, мамығын йолҡтоҡ та, эсен ярып, ҡар тултырып, тышҡа сығарып һалып торҙоҡ. Был алым ҡаҙҙың эсен, эсәк араһындағы майҙы айырып алыуҙы еңелләштерҙе. Эсе һыуҙа бешекләп алғас, ҡаҙ ҙа таҙа, матур йолҡолдо. Бергәләп эшләгәс, тиҙ арала ҡаҙҙарҙы эшкәртеп тә ҡуйҙыҡ, шунан күмәкләшеп йырлашып йылғаға сайырға киттек. Бер-ике өмәсебеҙ өйҙә ҡалып, ҡоймаҡ ҡойоп, ҡаҙ майы менән майлап, сәй ҡайнатып, килеүебеҙҙе көтөп торҙо. Эштең иң ауырын, мәшәҡәтлеһен тамамлағас, йылы өйҙә рәхәтләнеп, ҡоймаҡлап сәй эстек тә, ҡауырһын һыҙырыу эшенә тотондоҡ. Бер-беребеҙгә кәңәштәр бирә-бирә эшләгәс, яңғыҙыңа йырып сыҡҡыһыҙ мәшәҡәт булып күренгән эште лә тиҙ генә тамамлап ҡуйҙыҡ. Өмәселәр матурыраҡ ҡауырһындарҙан әллә күпме таба майлағыстар эшләне. Ошо 11 ҡаҙҙың мамығынан мин - бер, ә Фәнилә апай Мусина үҙҙәренең 23 ҡаҙынан ике мендәр эшләтеп алдыҡ. Хәләл көс менән үҫтергән ҡаҙҙарыбыҙҙың эс майының да файҙаһын күреп өлгөрҙөк. Оло йәштәге әсәйем нык йүтәлләп киткәс, кискеһен түштәрен ҡаҙ майы менән ыуып һалдыҡ, таң атыуға йүтәл йомшарған, тамаҡ ауыртыуы ла бөткәйне. Әле бер йәштәре лә тулмаған игеҙәк ейәндәребеҙгә лә профилактика өсөн тамсылап ҡына ҡаҙ майы эсерәбеҙ. Һыуыҡ көндәрҙә бит-ҡул ярылғанда ла ҡаҙ майы шифалы. Кискеһен йоҡлар алдынан биткә һөртөп ятһаң, иртән тороуға тире йомшарып, ундағы һырҙар яҙылып китә. Шуға ла, Алла бирһә, икенсе йылға ла бәпкәләрҙе күберәк алырбыҙ, тип ниәтләп торабыҙ. Хәләл көс менән үҫтергән ризығыбыҙҙы ҡышҡы һыуыҡ айҙарҙа балалар, туған-тумасалар, дуҫ-иштәр менән бергәләп ашарға яҙһын, тип теләйбеҙ...

Земфира апай менән Мәүлит ағай Кәримовтар Сосновка ауылының барлыҡ йәмәғәт эштәрендә лә ҡайнап йәшәгән, рухлы, сәмле ғаиләләрҙең береһе. Земфира апай 28 йыл башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләй, аҙаҡ бер аҙ мәҙәниәт өлкәһендә лә эшләп ала, әле ағинәйҙәр ойошмаһының әүҙем ағзаһы. Мәүлит ағай Урал арьяғы ижади көстәренең "Ҡуңыр буға" берләшмәһе рәйесе урынбаҫары, өс китап авторы. Әлеге ваҡытта "Китап" нәшриәтенә дүртенсе китабын баҫтырырға биргән. Икеһе лә ижади ҡарашлы, матурлыҡҡа ынтылған дәртле кешеләр, шуға күрә уларҙың аллы-гөллө сәскәгә күмелгән йорттары ла әллә ҡайҙан уҡ бар ауылға нур сәсеп, балҡып ултыра. Май сүлмәге тышынан билдәле, тип бушҡа ғына әйтмәй шул халыҡ. Нәҡ ошондай матур мөхиттә йәшәгәнгә рухтары ла бай, башҡарған эштәре лә изге, ә күңелдәре иһә йорттары кеүек киң һәм яҡты уларҙың.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһында йәшәүсе әсәйебеҙгә -

**Йосопова**
**Мәликә Ғибат ҡыҙына**

90 йәш тула. Әсәйебеҙ үҙенең 50 йыл ғүмерен уҡытыусылыҡҡа арнаған кеше. Ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, күпме балаларҙа туған телгә, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләне. Уҡыусылары өсөн дә, коллегалары өсөн дә ул үҙ эшенә тоғролоҡ, юғары профессионаллек өлгөһө булып ҡалды. Ә беҙгә, улдары Ринат, Ришат һәм ҡыҙы Рәшиҙәгә, ул һәр ваҡыт иң яҡшы әсәй, иң яҡын дуҫ, иптәш, кәңәшсе, тоғро юлдаш булды. Был донъяларҙы иртә ҡалдырған ағайыбыҙ, билдәле тарихсы-антрополог Ринат Йосопов әсәйебеҙ тураһында һәр саҡ шулай ти торғайны:"Әсәйебеҙҙең үҙ эшенә бирелгәнлеге, оптимизмы, тормошто һөйөүе, бөтөн ауырлыҡтарҙан, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булыуы һоҡландыра һәм беҙгә өлгө булып тора..." Әсәйебеҙгә сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ һәм уға ҡаҡшамаҫ һаулыҡ теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән ҡыҙы Рәшиҙә, улы Ришат, ейән-ейәнсәрҙәре.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24-29 декабрь "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.30, 13.00, 15.00 6+

**30 декабрь "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.00, 13.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24-25 декабрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 10.00, 15.00 0+

**26-30 декабрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 10.00, 12.30 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24-30 декабрь "Пушкинлендта Яңы йыл!"**, интерактив дискотека, мюзикл. Башлана 11.00, 13.00, 15.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24-30 декабрь "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраханцев), новогоднее представление 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**24-30 декабрь "Новогодний лес - место чудес!"** 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (26) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (27) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 28 (28) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 29 (29) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (1) йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 31 (2) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 1 (3) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы **300 һумдан 1000 һумғаса бүләк сертификаттары** һатып алырға тәҡдим итә! Яҡындарығыҙ тыуған көндәренә, юбилейҙарына, байрамдарға бүләкте үҙҙәре һайлап алһын, тиһәгеҙ, рәхим итегеҙ! Бүләк сертификаттарын "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексының "БашАкадемКнига" фирма магазинынан һатып алырға мөмкин. **Беҙҙең адрес: Революция урамы, 55. Тулыраҡ мәғлүмәтте 251-02-27 телефондары аша белә алаһығыҙ.**



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Был юлы рәхмәтебеҙ, әлбиттә, авторҙарыбыҙға. Гәзит - коллектив ижад. Редакцияның үҙендә эшләгән хәбәрселәр ниндәй генә эшлекле, һәләтле булмаһын, баҫма уларҙың яҙғандары менән генә ижад ителһә, ҡыҙыҡһыҙ булыр ине. Шуға ла гәзит-журналдар редакцияларында элек-электән мотлаҡ үтәлергә тейешле шундай ҡағиҙә йәшәй: авторҙар йәлеп итеү, авторҙар менән эшләү, уларҙың яҙмаларын нәшергә әҙерләү. Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите ҡарамағында ла бик тә эшлекле, зыялы, мәртәбәле авторҙар коллективы тупланған. Улар менән беҙҙең ике яҡлы бәйләнеш булдырылған һәм авторҙарыбыҙ гәзитебеҙҙең темаһына, форматына, йүнәлешенә, рухына тап килгән сығыштары менән беҙҙе лә, уҡыусыларыбыҙҙы ла ҡыуандырып тора. Һәр хәлдә, беҙ авторҙарыбыҙ менән көсләнбөҙ һәм бәхетлебеҙ.**



Баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан, аҫыл һүҙе, алтын фекере менән гәзитебеҙҙе күтәрмәләгән авторҙарыбыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Бына улар, беҙҙең сикһеҙ рәхмәтебеҙгә лайыҡ булыусылар: Хәлил Һөйөндөков, Фәүзиә Яхина-Усманова, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Эльза Мөхәмәҙиева, Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова, Таңһылыу Баһаутдинова, Айһылыу Ғарифуллина, Радик Өмөткужин, Лена Абдрахманова, Лена Хәйруллина, Лариса Абдуллина, Мәрйәм Бураҡаева, Тансулпан Бураҡаева, Зөлфиә Ханнанова, Иҙрис Ноғоманов, Зәкирйән Әминев, Әғләм Шәрипов, Мәүлит Ямалетдинов, Шәһүрә Әхмәҙиева, Гүзәл Ситдиҡова, Урал Мостафин, Нурия Ҡунысбаева, Мөҙәрис Багаев, Фәрзәнә Аҡбулатова, Байгилде Моталлап, Рәхимә Мусина, Зилә Нигмәтуллина, Самат Мөхәмәтйәнов, Айгизә Асҡарова, Гөлсинә Байгужина, Мотал Рәмов, Айбулат Псәнчин, Миңһылыу Абдуллина, Хәйҙәр Тапаҡов, Зөһрә Ҡотлогилдина, Йәмних Ҡашҡаров, Йәдкәр Бәширов, Рауил Асиголов, Зәйтүнә Көсәпова, Рәдис Дусалин, Нәзиә Бикбова, Әлфиә Батталова, Әлфиә Зәбдинова, Әлиә Исмәғилева, Таңһылыу Ҡарамышева, Сәйфулла Әмиров, Азат Ярмуллин, Рәүеф Бикташев, Радик Вахитов, Рифат Әйүпов, Сәлимйән Бәзретдинов, Фәүзиә Йәнтилина, Мәзинә Йәғәфәрова, Хәлиҙә Алтынбаева, Мирсәйет Ҡылысов, Әхәт Сәлихов, Таңһылыу Ғәйнуллина һ.б. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты, сәмде, гәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ.

**Барлыҡ авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә - рух, ҡот, тәнегеҙгә - ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы киләһе йылда ла дауам итәсәк.**

**29. Фәрит Иҫәнголовтың "Хәмит күпере"** хикәйәләр йыйынтығы - хеҙмәт, тыуған илгә һөйөү, уңғанлыҡ, ололар һүҙен тыңлау тураһында фәһемле әҫәрҙәр тупланған. "Хәмит күпере" хикәйәһе хәҙер мәкәп программаһына ла индерелгән.

**30. Кәтибә Кинйәбулатованың "Атай тауышы"** повесы - Бөйөк Ватан һуғышы осоронда йәшәгән балаларҙың тормошона арналған әҫәрҙе уҡыу йәш быуын өсөн үтә лә фәһемле буласаҡ.

**31. Фәрзәнә Аҡбулатова "Атай икмәге"** хикәйәләр йыйынтығы - был хикәйәләрҙе уҡып, геройҙар менән бергә илайһың да, ҡыуанаһың да. Китапҡа исем биргән хикәйәне уҡығанда һуғыш ваҡытындағы ыш тормошо, өлкәндәр менән бер ҡатар ауырлыҡтарҙы күтәргән балалар яҙмышы тураһында беләһең.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан ин-индәрен һайлап, шулар тураһында редакцияbыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

*ЯҢЫ КИТАП*

# "ТЫЛСЫМЛЫ ӘКИӘТТӘР"




Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә уҡыусылар тарафынан көтөп алынған баҫма - башҡорт һәм рус (тәржемә) телдәрендә башҡорт халыҡ әкиәттәренән торған **"Тылсымлы әкиәттәр" китабы** (төҙөүсеһе М. С. Игебаева) донъя күрҙе. Йөкмәткеле, сағыу итеп биҙәлгән, сифатлы ҡағыҙҙа баҫылған китап кесе һәм урта йәштәге балалар өсөн һәйбәт бүләк буласаҡ. Уларҙы нәшриәттең фирма магазинынан һатып алырға мөмкин.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре - халыҡ аҡылының балалар зиһененә үтеп инерлек итеп ябайлаштырылған формаһы. Ололар боронғон үҙенең тормош тәжрибәһен, тәбиғәт, кешеләр, йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр, гөмүмән, барлыҡ йән эйәләре, үҫемлектәр хаҡында күҙәтеүҙәрен, ваҡыт һынауын үткән тәрбиә ҡанундарын, изгелек менән яуызлыҡ төшөнсәһен әкиәт ерлегенә һалып, балаларҙың күңеленә еткергән. Батырҙар, зирәк ҡыҙҙар, батшалар, ҡанатлы ат, аждаһалар, убырҙар һәм башҡа геройҙарҙың ҡылыҡтары аша кескәй тыңлаусылар яҡшылыҡ менән яманлыҡ, мәл менән мәңгелек, дөрөҫлөк менән ялған, дуҫ менән дошман, эшһөйәрлек менән ялҡаулыҡ, әскерһеҙлек менән әшәкелек кеүек төп йәшәйеш һорауҙарына яуап алған, шул рәүешлә үҙҙәре лә аңғармаҫтан оло тормошҡа әҙерләнгән.

Әлеге ваҡытта ла халыҡ ижадының әкиәт жанры үрҙә телгә алынған төп функцияларын һаҡлап ҡалған. Шуның менән бергә әкиәт балаларҙың художестволы һәм ассоциатив фекерләү һәләтен үҫтерә, уларға әҙәп-әхлаҡ нормаларын формалаштыра, сетерекле хәлдәрҙән сығыу моделен күҙалларға өйрәтә. Китапта бирелгән матур һүрәттәр, милли биҙәк элементтары әҫәрҙең йөкмәткеһенә баҙыҡлыҡ өҫтәү менән бергә, балаларҙың эстетик зауығын үҫтерә.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕМ БАШЫНАН ҺЫЙПАЙ -

## эт шуға ҡойроҡ болғай

Эште башлаған кешене маҡтама, эшләп бөтөргән кешене маҡта.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡоллоҡ кешене шул тиклем дәрәжәлә кәмһетә, күңеленә ҡоллоҡ инеп урынлашҡан кеше тора-бара хатта үҙенең бығауҙарын ярата башлай.

**(Л. Вовенарг).**

Иң ҡурҡынысы - бәләкәй кешенең оло власы.

**(И. Шевелев).**

Тотош халыҡтың ҡурҡаҡлығы - уның өсөн ҡоллоҡ бығауҙары сүкеү мөмкинселегенең иң төп шарты.

**(Ж. Марат).**

Кем күпте теләй, ул үҙ ғүмерен көтөүҙәр менән үткәрә; ә кемдең теләктәре юҡ, ул бары тик үлем көтә.

**(П. Буаст).**

Үҙ милкең менән иртәгә донъя ҡуйырға әҙерләнгән кеше кеүек файҙалан, үҙ байлығыңды оҙаҡ йәшәргә йыйынған кеше һымаҡ һаҡла. Ошоларҙы иҫеңдә тотоп, һаранлыҡ менән йомартлыҡ араһындағы урталыҡта ҡала белгән кеше - иң аҡыллыһы.

**(Лукиан).**

Яҡшы бала яман атаның ишек төбөндәге башын түргә һалыр, яман бала яҡшы атаның түрҙәге башын ишек төбөнә һалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡса барыһын да эшләй, тигәндәр ысынында аҡса өсөн барыһын да эшләй.

**(Д. Галифакс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡыусы уҡытыусыһына йүгереп килеп инә лә:**

**- Уҡытыусым, сит илдәге сауҙа буйынса бер консультант аҙна һайын гәзиттә рубрика алып бара һәм һинең фекерҙәреңде урлай! - ти.**

**- Әйт әле, ә ул минең фекерҙәрҙе ныҡ боҙамы?**

**- Юҡ. Шул илдә йәшәгән дуҫым миңә мәҡәләләрҙе тотош уҡып сыҡты. Әйтерһең дә, һин яҙған кеүек, тик ул кеше һеҙҙең фекерҙәрҙе үҙ исеме аҫтында сығара. Улай бит ярамай! Нимә эшләргә уйлайһың, уҡытыусым?**

**- Ә ни өсөн мин нимәләр эшләргә тейеш?**

**- Был кеше бит һинең фекерҙәреңде урлай. Белдекһеҙ булһа ла, үҙен аҡыллы итеп күрһәтә, һинең аҡылыңды файҙалана!**

**- Ләкин минең аҡылым бит кәмемәй, әллә мине ахмаҡлана бара, тиһеңме? - тип көлә уҡыусыһынан уҡытыусы".**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2344/12